ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

20-26 декабрь (аҡъюлай) 2024

№50 (1143)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

## Үәт, мәшинниктәр!




6

## Милли ризыҡтарһыҙ, ҡурайһыҙ, атһыҙ...

таяныр нигеҙебеҙ бушағыраҡ булыр ине



8-10

## Һөйгөләнеп-төйгөләнеп

Ғүмер итә һәммәбеҙ



11

## Ватанды һөйөү - имандан



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Кешенең аҡыл туплауға өс юлы бар: уйланыуҙар юлы - бынығы иң изгеһе; башҡаларға оҡшарға тырышыу юлы - бынығы иң еңеле; үҙ тәжрибәң менән яуланған юл - бынығы иң ауыры.***

***(Конфуций).***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Бер нәмәгә ҡарамаҫтан, тормош дауам итә: игенсе икмәк үҫтерә, малсы мал аҫрай, юлдар һалына, балалар мәктәпкә йөрөй, хатта ки өлкән йәштәгеләрҙең ғүмер оҙайлығы арта бара. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға Мөрәжәғәтнамәһендә лә барлана бына ошондай темалар...***

***Данияр МӨХӘТДИНОВ, хеҙмәт ветераны, Стәрлетамаҡ ҡалаһы:*** Миңә 75 йәш, тимәк, республика буйынса рәсми теркәлгән ғүмер оҙайлығын аша атлап уҙғанмын, шөкөр. Ләкин 73 йәш, билдәле, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барған пенсионер өсөн һис тә сик түгел. Республикабыҙҙа ғүмер оҙайлығын һаулыҡ һаҡлау өлкәһе ҡаҙаныш тип әйтһәләр ҙә, мин бының менән әллә ни килешә алмайым. Дөрөҫ, бөгөн дауахана юлын тапаусыларҙың күпселеге, әлбиттә, өлкән йәштәгеләр. Ә шулай ҙа мин, һаулығың - үҙ ҡулыңда, тигәнгә инанғанмын. Был йәһәттән кешегә сәләмәт йәшәү рәүеше, дөрөҫ туҡланыу, әүҙем физик тормош ныҡ йоғонто яһай. Әлбиттә, йәшелсә ашап, дарыу үләне эсеп кенә өйҙә ултырыу ҙа дөрөҫ түгел. Өлкән йәштәгеләр бер-береһе менән аралашып, социаль әүҙемлек шарттарында йәшәргә тейеш, тигән фекерҙәмен. Бына был өлкәлә беҙгә, әлбиттә, республикабыҙ Хөкүмәте, власть органдары ярҙамы кәрәк. Бынан дүрт йыл элек, 2020 йылдың октябрендә иғлан ителгән "Башҡорт ғүмер оҙайлығы" тигән проект тап ана шундай беҙгә бик кәрәкле программа булып сыҡты ла инде. Республика пенсионерҙары өсөн был проект оло йәштәгеләрҙең һаулығын нығытыу, ғүмерен оҙайтыу һәм уның тормошон күңеллерәк, яҡтыраҡ, өмөтлөрәк итеү буйынса эшлекле һәм берәгәйле сара булды, беҙгә ғәжәйеп донъябыҙ матурлығын асты, тип баһалар инем. Уның йүнәлештәре байтаҡ ҡына: йәнең теләгәненә ҡушылып китергә мөмкин. Ҡатыным, мәҫәлән, шуларҙың береһенә йөрөп, компьютерҙа эшләргә өйрәнде, ә мин үҙем "Туризм" менән "Физик культура" йүнәлештәрен үҙ иттем, сөнки электән спорт менән дуҫмын, сәйәхәт итергә яратам. Әйткәндәй, быйыл ГТО комплексы нормаларын тапшырып, махсус билдәгә лайыҡ булған менән ашыу йәштәшем араһында үҙемдең дә булыуым күңелгә ғорурлыҡ өҫтәй. Ошо программала йөрөй башлағандан алып, тымау, киҙеү, һалҡын алдырып сирләү кеүек нәмәне оноттом, шөкөр. Быйыл шулай уҡ бер төркөм пенсионерҙар менән туғандаш Беларусь Республикаһында булып ҡайттым. Башҡа төркөмдәрҙән Абхазияға, Үзбәкстанға барып ҡайтыусылар ҙа байтаҡ булды...

Билдәле булыуынса, "Башҡорт ғүмер оҙайлығы" проектында быйыл ғына ла 20 меңләп кеше ҡатнашҡан икән. Ә проект ғәмәлгә ингәндән алып, йәғни дүрт йыл буйына, унда 690 мең кеше һаулығын нығытҡан һәм йәшәүгә яңы көс, дәрт алған. Был программа артабан да дауам ителеп, уға мөмкин тиклем күберәк кеше йәлеп ителһен ине, сөнки ул хаҡта, айырыуса ауыл райондарында, хатта ишетеп тә белмәгән кешеләрҙең булыуы ғәжәпләндерә. Урындарҙа социаль хеҙмәт органдары ошо йүнәлештә аңлатыу, ойоштороу эштәрен йәнләндерһә ине.

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

# ЕР ШАРЫНЫҢ...

## ҡояшлы яғында йәшәгәндәр бар әле



**Бөгөн кескәй баланан алып өлкән йәштәгеләргә тиклем бөтөн донъя халҡының күҙе интернет селтәренә төбәлгән, ләкин улар унда уҡып, белемен арттырып, етди темалар буйынса фекер алышып ултырамы һуң?**

Юҡ, әлбиттә, ә кем нимә теләй, шуны эшләй: постар яҙа, видео-фото төшөрөп һала, икенселәре шуларҙы ҡарай, ышана; кемдер күрәләтә алдаҡ, ҡотҡо тарата, комменттар яҙа, кемделер һүгә, кем менәндер тиргәшә... Һәм быуаттар буйы белем хазинаһы, әхлаҡ дәреслеге булып һыналған китаптарҙан да, бөгөнгөбөҙ йылъяҙмаһы булараҡ, бөтөн хәл-ваҡиғаларҙы теркәп, уға баһа белдереп барыусы һәм туған телебеҙҙе рәсми даирәлә йәшәтеп килеүсе, уның һүҙ-стиль байлығын һаҡлап килеүсе гәзиттәребеҙҙән дә үҙҙәрен күрәләтә мәхрүм итә. Дөрөҫ итеп яҙырға, һөйләшергә онота - шулай итеп, кешене кеше итеп тәрбиәләүсе әсә теле байлығынан, рухынан яҙа... Өйҙә лә, эшкә барғанда ла, мәктәптәрҙә лә, урамда ла, ашап-эскәндә лә, хатта юрған аҫтында ла гаджетын ҡосаҡлап ята.

(Дауамы 2-се биттә).

12+

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...



# ЕР ШАРЫНЫҢ...
## ҡояшлы яғында йәшәгәндәр бар әле

**(Башы 1-се биттә).**

Шулай инде, беҙҙә сама тойғоһо һәр саҡ етешмәне. Әллә әйбер күрмәй үҫкәнлектән, әллә тәрбиә кимәле етмәгәндән - һәр хәлдә, донъя халҡы уҡыу тигән шөғөл барын онотто. Классик һәм бөгөнгө әҙәбиәт тә, гәзит-журналдар ҙа ҡыҙыҡһындырмай: замана электрон саралар арҡаһында тарихты ла, мәҙәниәт-сәнғәтте лә бар тип тә белмәгән маңҡорт быуындар үҫеп килә. Ошондай уйҙарҙан бошоноп алһам да, икенсе яҡтан, халыҡ яҙыусыһы Мостай ағай әйтмешләй, Ер шарының ҡояшлы яғында йәшәгән милләттәштәремде һәм милләтебеҙ дуҫтарын күреп, күңелем үҫә. Юҡ, тим, бар әле, күп әле арабыҙҙа рухлы, юғары мәҙәниле, башҡорт донъяһын үҙ иткән, халҡыбыҙҙың героик үткәненә, батырҙарына, ҡурай моңона, эпос һәм легендаларына ғашиҡ кешеләр.

Мәҫәлән, үҙе башҡорт булмаһа ла, күңеле менән ошо халыҡ рухын үҙ иткән ижадсы Михаил Воронов-Кушаковский атлы ир уҙаманы. Мин Силәбе ҡалаһында йәшәүсе был талант эйәһе хаҡында интернет сығанаҡтарҙан түгел, ә "Киске Өфө" гәзитенән уҡып белдем. Ғөмүмән, "Киске Өфө"нө шуның өсөн алдырам һәм яратып уҡыйым: унда баҫылған материалдарҙы һеҙ башҡа бер ҡайҙан да таба алмаясаҡһығыҙ. Халҡыбыҙ рухиәтен күтәрмәләүсе, боронғо һәм яңыса йолаларыбыҙҙы күрһәтеүсе, бөгөнгө зыялыларыбыҙ, талантлы йәштәребеҙ менән таныштырыусы ошо гәзит булмаһа, минең донъям күңелһеҙ һәм ҡараңғы булыр ине һымаҡ.

Гәзитебеҙҙең 48-се һанында мин Йылайыр районынан Зилә һылыу Солтанова яҙып ебәргән "Һарыҡ - байлыҡ" тигән үҙенсәлекле һәм ҡыҙыҡлы ла, файҙалы ла сара тураһында ҡыуанып уҡыным. Кемдәр уҡымаған, "Киске Өфө"нө табып, ҡулығыҙға алып, әле телгә алынып киткән ошо ике мәҡәләне уҡып сыҡһағыҙ ине. "Йылайыр ағинәйҙәре үткәргән әлеге "Һарыҡ - байлыҡ" байрамы халҡыбыҙҙың мал-тыуар аҫрап, етеш донъя көтөүе, уңғанлығы хаҡында һөйләй. Был сара республика кимәленә сығарылып, башҡа райондарҙа ла ойошторолһа ине. Ул бит республикабыҙ ауылдары халҡын буш ятҡан ерҙәрҙе көтөүлек итеп, мал-тыуар аҫрарға дәртләндерәсәк, тип уйлайым. Ятраҡан гәзитемә алдағы көндәрҙә лә матур табышасыштар, ижад ҡомары, уҡыусыларын ҡыҙыҡлы мәҡәләләр менән ҡыуандырыуҙарын теләйем.

**Мөнирә ҒАТАУЛЛИНА,**
**педагогия ветераны.**

БЫНАҒАЙЫШ!

# ҺӨЙӨНСӨ КӨЙӨНӨСТӘРЕ



**Ҡыш әле ныҡлап үҙ хоҡуҡтарына инеп өлгөрмәне, киң мәғлүмәт сығанаҡтары кемуҙарҙан "һөйөнсөләй" ҙә башланы: киләһе йылдың ғинуарынан торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр квитанцияһында яңы пункт пәйҙә буласаҡ, имеш: йорт ихатаһы биләмәһенән ҡарҙы сығарған өсөн һәр фатир майҙаны иҫәбенән... түләү һалынасаҡ. Эйе-эйе, яңылыш ишетмәнегеҙ: ихата майҙаны түгел, ә фатир майҙанының һәр квадрат метрынан 3-тән алып 10 һумға тиклем. Тимәк, 50 кв.м фатирың өсөн 150-нән 500-гә тиклем аҡсаңды сығарып һаласаҡһың. Шуныһы сәйер, ни өсөн түләү фатир майҙанынан сығып иҫәпләнә, ҡар бит фатирҙан түгел, ихатанан сығарыла? Кем әйтмешләй, көлөргәме, иларғамы бында...**

Дөрөҫөн әйткәндә, был яңылыҡ та түгел-түгелен: ул хаҡта хәҙер өс -дүрт йыллап ҡына һүҙ баралыр. Ғүмер-ғүмергә белеүебеҙсә, йорт алды территорияһын йыл әйләнәһенә таҙартып тороу торлаҡ-коммуналь хужалыҡ һәм идара итеү компаниялары эшселәренең мотлаҡ хеҙмәт бурысына инеп, уның өсөн "йортто ҡарау" ("содержание") пункты буйынса түләй инек. Ошоға тиклем ул шулай дауам итте лә, ләкин ихата алдында тау-тау өйөлгән ҡарҙы ситкә сығарыу тигән "хәстәрлек"те бер ваҡытта ла күрмәгәйнек. Был ҡар өйөмдәренең бер кемгә лә зыяны тейгәне булманы, киреһенсә, унда сыр-сыу килеп балалар тау шыуып рәхәтләнде. Ҡар мул яуған йылды уны ситкә ташыу, бәлки, кәрәктер ҙә, ләкин был бер үк "йортто ҡарау" статьяһы буйынса икеләтә түләү һалыу булмаймы? Улай тиһән, идара итеү компаниялары ҡыш ҡар күрәргә тейешле урам һепереүселәр етешмәүгә зарлана, шунлыҡтан айына бер-ике тапҡыр ҡарҙы махсус техника таҙарта. Тик йорт ихаталары өсөн бик һирәк эләгә торған был таҙартыу сараһы хаҡында алдан иҫкәртеүгә ҡарамаҫтан, йортта йәшәүселәр ишек алдына теҙелгән машиналарын алмай йонсота, шуға ла махсус техника арлы-бирле асыҡ урындарҙы ғына ҡырҙырып китә. Был иһә йорт, шулай уҡ машина хужаларының яуапһыҙлығы һәм торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәрҙең эшен ҡатмарлаштырыу булып тора; икенсенән, авто хужалары ҡар баҫҡан биләмәне йырып сыға алмайынса, үҙҙәренә ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Рәсәйҙең ҡайһы бер ҡалаларында идара компанияларының бынан бер нисә йыл уҡ элек әле ихатаны механизация ярҙамынды таҙартҡан һәм ҡарҙы йорт биләмәһенән ситкә сығарған өсөн түләү һалыныуы РФ Юғары Суды тарафынан кире ҡағылып, был ғәмәлдәге законды боҙоу була тигән ҡарар сығарылғайны. Идара компанияларының өҫтәмә хеҙмәтләндереү индереүе һәм уның өсөн түләтеү фәҡәт йорт хужаларының дөйөм йыйылышында ғына хәл ителергә тейеш, тип әйтелде был ҡарарҙа.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Бер нәмәгә ҡарамаҫтан, тормош дауам итә: игенсе икмәк үҫтерә, малсы мал аҫрай, юлдар һалына, балалар мәктәпкә йөрөй, хатта ки өлкән йәштәгеләрҙең ғүмер оҙайлығы арта бара. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға Мөрәжәғәтнамәһендә лә барлана бына ошондай темалар...***

***Ринат ӘХТӘРИЕВ, Благовар районы фермеры:*** Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайға Мөрәжәғәтнамәһендә игенселек, шулай уҡ малсылыҡ буйынса йыл йомғаҡтарын барлап, республика ауыл хужалығы хеҙмәтсәндәренә рәхмәтен белдерҙе. Был ауыл эшсәндәрен яңы хеҙмәт уңыштарына дәртләндерә, әлбиттә. Мин үҙем малсылыҡ менән 2000 йылдан алып ныҡлап шөғөлләнәм. Тәүҙә һыйыр малы тота инем, ләкин был тармаҡ минең өсөн әллә ни отошло түгел, эре мал ҡарауҙың үҙенә күрә ауырлыҡтары, ҡатмарлыҡтары бар. Шуға күрә хәҙер һарыҡсылыҡ эшенә тотондом һәм яңылышманым, тип уйлайым. Әле минең хужалыҡта 300-ләп баш һарыҡ аҫрала, киләсәктә, бәлки, меңгә еткерергә лә булыр, тик илдә тиҙерәк тыныслыҡ, тотороҡлоҡ урынлашып, тыныс хеҙмәткә тағы ла ҙурыраҡ мөмкинлектәр асылһа ине, тип теләйбеҙ. Һарыҡ ите һәр ваҡыт үтемле, халыҡта уға ихтыяж бар, хатта итте йыш ҡына өйҙән дә килеп алалар. Ваҡ малға бесәнде лә, ашлыҡты ла үҙ көсөбөҙ менән әҙерләйбеҙ.

Ғөмүмән, һарыҡсылыҡ тармағының киләсәге бар, хөкүмәт тә хәҙер ауылда эшләргә теләге булған фермер һәм эшҡыуарҙарға ярҙам итергә әҙер тора. Былтыр шулай РФ ауыл хужалығы министры урынбаҫары Андрей Разиндың төрлө министрлыҡтар, төбәк ауыл хужалыҡтары идара итеү органдары ҡатнашлығында һарыҡсылыҡ тармағына арналған бер сара үткәреүе хаҡында уҡығайным. Ул 2000 йылдан алып һарыҡсылыҡ тармағының үҫешә барыуы һәм бөтөн хужалыҡтар буйынса ошо ваҡ мал һанының 49,9 процентҡа артыуы хаҡында ҙур ҡәнәғәтләнеү менән хәбәр итте. Был һөйләшеүҙә сифатлы аҙыҡ-түлек булараҡ, һарыҡ итенең үтемле булыуы ғына түгел, ә тоҡомло малдарҙың ҡиммәтле йөнө лә еңел сәнәғәт өсөн бик кәрәкле сеймал булыуын юғары баһалағайны. Онотола яҙған был тармаҡ киләсәктә шулай йәнләнеп китер әле, тип ышанам.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Кисә, 19 декабрҙә, Рәсәй Президенты Владимир Путин менән тура бәйләнеш булды. Дәүләт башлығы йылға йомғаҡ яһаны һәм ил халҡының һорауҙарына яуап бирҙе. Сара тура бәйләнеш һәм матбуғат конференцияһы форматында үткәрелде. Ил Президенты менән тура бәйләнешкә Башҡортостандан Рафаэль Хәкимов ("Башинформ"), Руслан Батыргәрәев менән Артур Ханов (БСТ) һәм Виктория Куянова ("Ейәнсура таңдары") аккредитация үтте.

✓ Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары республика Хөкүмәте вице-премьерҙарын тәғәйенләүгә ризалығын бирҙе. Рөстәм Моратов республика Премьер-министрының беренсе урынбаҫары - иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министры, Урал Килсенбаев Хөкүмәттә беренсе вице-премьер, Азамат Абдрахманов Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - Хөкүмәт аппараты етәксеһе итеп тәғәйенләнә. Илшат Фәзрахманов, Александр Шельдяев, Ирек Сәғитов, Рөстәм Ғәзизов, Наталья Полянская вице-премьерҙар вазифаһында ҡала. Башҡортостан министрлыҡтары һәм ведомстволары етәкселәре республика Башлығы указы менән тәғәйенләнә.

✓ 12-14 декабрҙә Өфөлә VI Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы үтте. Тарихи форумда Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән һәм сит илдәрҙән 500-ҙән ашыу делегат ҡатнашты. Башҡортостандан - 318, Рәсәй төбәктәренән - 171, 10-дан ашыу дәүләттән 38 делегат булды. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаттары араһында башҡа милләт вәкилдәре лә бар ине.

✓ Республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Радий Хәбиров VI Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына йомғаҡ яһаны. Башҡортостан Башлығы һүҙҙәренсә, ҡоролтайҙа башҡорт милләте өсөн мөһим мәсьәләләр тикшерелде. "Рәсәй төбәктәренән һәм 15 сит дәүләттән 527 делегат ҡатнашты. Минеңсә, беҙ милләттең артабанғы үҫешен ентекле тикшерҙек һәм әһәмиәтле ҡарарҙар ҡабул иттек", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәйҙең граждандар оборонаһы, ғәҙәттән тыш хәлдәр һәм тәбиғәт афәттәре эҙемтәләрен бөтөрөү эштәре буйынса министры урынбаҫары, эске хеҙмәт генерал-полковнигы Илья Денисов менән осрашты. Осрашыуҙа төбәктә янғынға ҡаршы хеҙмәтте үҫтереү перспективаларын, шулай уҡ янғындарҙы иҫкәртеү маҡсатында шәхси йорттарҙа GSM-модулдәр ҡуйыу мәсьәләһен, ҡасаҡтарҙы һәм мәжбүри күскенселәрҙе ваҡытлыса урынлаштырыу пункттарының эшен, сәнәғәт предприятиеларын һаҡлау өсөн өҫтәмә сараларҙы тикшерҙеләр.

***✓ "Һөйөнсө"нөң икенсеһе - традиция буйынса 2025 йылда торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә тарифтарҙың йәнә артыуы. Сәбәбе - газ, электр энергияһы кеүек яғыулыҡ-энергетика ресурстары хаҡының ҡиммәтләнеүе.***

Ҡар муллығы ҡалаларҙа транспорт хәрәкәтенә лә, йәйәүлеләр өсөн дә проблемалар тыуҙыра, әлбиттә, уныһы аңлашыла. Шуға күрә лә бит Өфө ҡалаһында өсөнсө урында ҡар иретеү пункты асыу ҡарала. Башинформдың ошо йылдың 27 ноябрендәге хәбәренә ҡарағанда, ул Затон менән Алексеевка шоссеһы биләмәһендә төҙөләсәк. Әлеге ваҡытта баш ҡаланың Калинин һәм Совет райондарында ике ҡар иретеү пункты эшләй. Уларҙың ҡеүәте - тәүлегенә 2,7 мең кубометр. Пункттар тулы көсөнә эшләп торһон өсөн, әлбиттә, ҡар кәрәк. Ихаталар хаҡында әйтеүе ҡыйын, ә бына ҡыш буйы Өфө урамдары хәҙер тап-таҡыр буласаҡ, тигән ышаныс бармы?..

"Һөйөнсө"нөң икенсеһе - традиция буйынса 2025 йылда торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә тарифтарҙың йәнә артыуы. Сәбәбе - газ, электр энергияһы кеүек яғыулыҡ-энергетика ресурстары хаҡының ҡиммәтләнеүе, тип хәбәр итә банки.ру сайты. 2025 йылдың 1 июленән ил буйынса индексация уртаса 11,9 процент тәшкил итәсәк. Был газға, электр энергияһына, һыуға һәм йылытыуға ҡағыла. Айырым алып әйткәндә, газға, мәҫәлән, тарифтарҙың күтәрелеүе - 10,3, электр энергияһына 12,6 процент буласаҡ.

Башҡортостан буйынса 2025 йылда электр энергияһына хаҡтар мәғлүм булды. Тарифтар буйынса республика дәүләт комитеты ҡарарына ярашлы, коммуналь хеҙмәттәргә хаҡтың 2025 йылдың 1 июленән "үҫеүе" көтөлә. Документта әйтелеүенсә, газ плитәһе менән файҙаланыусы күп фатирлы йорттарҙа йәшәүсе ҡала халҡы өсөн тариф 12,6 процентҡа, йәғни кВт/сәғәт өсөн 4,36-нан 4,91 һумғаса артасаҡ. Ә инде электр плитәһе менән ҡулланыусы ҡала һәм ауыл халҡына тарифтар бер үк кимәлдә - 3.05-тән 3,44 һумғаса арта.

Әйткәндәй, электр энергияһына бөтөн Рәсәй буйынса айырып ҡаралыусы (дифференцияцияланған) тарифтар индерелә башланы. Ябай тел менән әйткәндә, был электр энергияһын күберәк тотоноусының юғарыраҡ тариф буйынса түләүен аңлата. Бындай тариф индереүҙең маҡсаты, тәү сиратта, криптовалюта менән эш итеүселәрҙе ташламалы тарифтарҙан ситләтеү. Майнерҙар был эштәрендә электр энергияһын күп тотона һәм килем ала, ләкин электр уты өсөн түбән тариф буйынса түләй. Бынан тыш, улар электр селтәре системаһына көс төшөрә. Хөкүмәт электр энергияһын ҡулланыу диапазондарын түбәндәгесә бүлеп ҡараясаҡ: беренсе диапазон - энергияны иң әҙ ҡулланыу: айына 0-дән 3900 кВт сәғәт. Был система аҙ тәьмин ителгән һәм социаль яҡлауһыҙ граждандарға ярҙам рәүешендә индерелә. Ай эсендә юғарыла килтерелгән күрһәткестәрҙән артыҡ тотонмаған хәлдә был төркөм өсөн тариф иң арзаны буласаҡ. Икенсе диапазон айына 3901-ҙән 6000 кВт ҡулланыусылар. Улар өсөн киловатт/сәғәтенә түләү ҡиммәтерәк торасаҡ. Өсөнсө диапазонда 6001 киловаттан алып, электр энергияһын иң күп тотоноусылар. Күпселек ҡулланыусы физик шәхестәр, ҡағиҙә булараҡ, электр энергияһына беренсе диапазон буйынса иҫәпләшәсәк. Ҡулланыусыларҙы айырып ҡарау тәртибе торлаҡ майҙандарын коммерция маҡсаттарында файҙаланып, энергияны саманан тыш күп тотоноусы ҡайһы бер намыҫһыҙ кешеләрҙе асыҡларға ярҙам итәсәк.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# СИРИЯ МЕНӘН НИҘӘР БУЛЫР?



**Донъя сәхнәһендә күренештәр сәғәт, минут һайын тип әйтерлек төрләнеп, үҙгәреп тора, әйтерһең дә, калейдоскоп әйләнә лә әйләнә…**

• Әле генә Сириялағы хәлдәр тетрәндерһә, бөгөн унда сағыштырмаса тынлыҡ, ләкин ул ваҡытлыса булыуы бик мөмкин, сөнки илдә власть алмашынғас, "тәмле киҫәк" янында әйләнгеләүсе "шакалдар" күбәйә башланы. Иң беренсе, әлбиттә, Израиль был тарафҡа ла ағыуын сәсергә өлгөрҙө һәм унын армияһы Хермон тауҙары районындағы Сирия территорияһын үҙ контроленә алды. Өҫтәүенә, Төркиә армияһы Сирияның төньяғында үҙ көстәрен йәнләндерә, ә Америка илдең төньяҡ-көнсығышындағы Сирия армияһы менән РФ Ҡораллы Көстәре контингентын һәм хәрби базалар менән күҙәтеү пункттарын контролгә алды. Ул ғына ла түгел, АҠШ, Төркиә һәм Израилдең Һауа Ҡораллы көстәре Сирияның ҡорал складтарын утҡа тота. Ә Дамаскиҙағы яңы власть илдең һәм халыҡтың һуғыштан арыуы һәм Сирияның яңы конфликттарға бәйләнергә йыйынмауын белдерә.

Әйткәндәй, Рәсәй ғәскәрҙәре Латакиялағы Хмеймим авиабазаһында, шулай уҡ Урта диңгеҙ яры Тартус портындағы хәрби-диңгеҙ базаһында ҡала. 2017 йылда Мәскәү менән Әсәд хөкүмәте араһындағы килешеү буйынса был территориялар Рәсәй ғәскәренә 49 йылға файҙаланыу өсөн бирелгән. Сирияның яңы властары Рәсәй мәнфәғәттәренә ҡағылмаҫҡа тырышыуҙарын белдерҙе һәм Рәсәйгә үҙ мөнәсәбәтен ике ил өсөн дә файҙалы итеп ҡорорға саҡырҙы.

• Грузияла - яңы президент! Һайлауҙар илдә быйыл яңы форматта - һайлаусылар коллегияһы тарафынан тауыш биреү юлы менән 15 декабрҙә үтте һәм идара итеүсе "Грузия хыялы" партияһынан берҙән-бер кандидат - хәҙер һигеҙ йыл инде сәйәсмән, элекке профессиональ футболсы Михаил Кавелашвили Грузия президенты итеп һайланды. Яңы президенттың инаугурацияһы 29 декабргә тәғәйенләнгән. Үҙәк һайлау комитеты һайлауҙарҙы раҫланы, ләкин ошо көндәрҙә вәкәләте ғәмәлдән сыҡҡан экс-президент Саломе Зурабишвили ҡәнәфийен бирергә ашыҡмай: ул яңы булып үткән һайлауҙар һөҙөмтәһен танымаҫҡа маташа һәм оппозиция яҡлыларҙы власҡа ҡаршы сығыштарға өндәй. Бәхеткә, урамға сығыусылар сафы күҙгә күренеп һирәгәйә, ә сыҡҡан кешеләр парламент алдында... футбол уйнай! Шулай итеп, протест акцияһы әкренләп һүнә барғандай. Тик бына Европа сәйәсәмәндәренә был оҡшамай, улар күрәләтә закон боҙоп, экс-президент Зурабишвили кандидатураһын күтәрмәләүҙе дауам итә.

• Трамптың командаһы Венгрия премьер-министры Виктор Орбандың Раштыуа көндәрендә Украинала утты туҡтатыу тураһындағы тәҡдимен ҡарарға әҙер булыуын хәбәр итте. Әммә Владимир Зеленский хатта Раштыуа хөрмәтенә лә Рәсәй менән килешеүгә барырға һәм әсирҙәр менән алмашыуға ҡаршы булыуын белдерә. Ә шул уҡ ваҡытта, украина журналисы Владимир Бойко күҙәтеүенсә, 2025 йылға ил армияһының таралып бөтөү ихтималлығы бар. Бер батальон командиры урынбаҫарының һөйләгәндәренә нигеҙләнеп, ул үҙенең социаль селтәрендә былай тип яҙа:"Был батальонды Херсон өлкәһендәге пехота ротаһын көсәйтеү өсөн ташлағайнылар. 90 кешенең өсәүһе генә Кураховҡа тиклем килеп етә алды - башҡалар юлда ҡасып бөттөләр..." Әйткәндәй, быйыл ноябрь айында ғына ла дезертирлыҡ тураһында 19 мең енәйәт эше ҡуҙғатылған. Украиндарҙың күбеһе, ысынлап та, мәжбүри мобилизациялауға ҡаршы сығыш яһай. Протест билдәһе итеп, улар военкомат машиналарын юҡ итә. Быйыл ғына ла Украина Ҡораллы көстәренең 260 машинаһы яндырылған, тип хәбәр итә ren.tv порталы.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Бер нәмәгә ҡарамаҫтан, тормош дауам итә: игенсе икмәк үҫтерә, малсы мал аҫрай, юлдар һалына, балалар мәктәпкә йөрөй, хатта ки өлкән йәштәгеләрҙең ғүмер оҙайлығы арта бара. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға Мөрәжәғәтнамәһендә лә барлана бына ошондай темалар...***

***Рәшиҙә МОСТАФИНА, Өфө районы Булгаков мәктәбе директоры:*** БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға Мөрәжәғәтнамәлә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала мәғариф үҫешенә бәйле хәлдәр тураһында бәйән итеп, 5 йыл эсендә 44 яңы мәктәп төҙөләүе хаҡында әйтеп киткәйне. Ана шуларҙың береһе - беҙҙең Булгаковтағы "Юғары ос!" мәктәбе. Уның асылыуына йыл ярым ғына әле, шулай булыуға ҡарамаҫтан, үҙенең исеме менән дә, заманса мөмкинлектәре менән дә ул күптәрҙә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Исеменә килгәндә, бөтәбеҙгә лә мәғлүм булыуынса, Башҡортостан Хөкүмәте күрһәтмәһе буйынса 2020 йылдың июль айында муниципаль дөйөм белем биреү ойошмаларына "Юғары ос!" белем биреү проектын индереү тураһында Концепция раҫланғайны. Тәҡдим ителгән проект уҡыусыларҙың урта дөйөм белем биреү программаларына ярашлы тәбиғи һәләттәрен үҫтереү һәм үҙаллы тормошҡа әҙерләүгә йүнәлтелгән комплекслы программанан ғибәрәт.

Проектҡа ярашлы, мәктәбебеҙ заманса йыһазландырылды: Бөгөнгө көндә мәктәптә 1200 уҡыусыға 60-тан ашыу уҡытыусы белем бирә. "Юғары ос!" мәктәбендә тиҙ арала алдынғы ҡарашлы, тырыш уҡытыусылар коллективы һәм әүҙем ата-әсәләр комитеты тупланды. Беҙҙә тиҫтәләгән милләт балалары белем ала. Шуларҙың барыһы ла башҡорт телен дәүләт теле булараҡ ҡыҙыҡһынып өйрәнә. Быға ата-әсәләр ҙә ыңғай ҡараштa. Башҡа предметтарҙы өйрәнгән кеүек, башҡорт теленә лә иғтибар ҙур, төрлө конкурс-олимпиадаларҙа ла ихлас ҡатнаша уҡыусылар. Бөгөнгө көн темаһы - илһөйәрлек тәрбиәләү мәктәп коллективы эшендә ҙур урын алып тора. 5-се класс уҡыусылары шаймуратовсылар исемен ғорурлыҡ менән йөрөтә. Мәктәптә шулай уҡ илһөйәрлек кластары ла асылды. Бынан тыш, беҙҙең инженерҙар класы, экологик йүнәлештәге кластар бар. Былар барыһы ла үрҙә әйтеп кителгән проектҡа ярашлы тормошҡа ашырыла.

Алда торған бурыстарҙы атҡарыу өсөн "Юғары ос!" мәктәбендә бөтә мөмкинлектәр ҙә бар. Уҡытыусылар, ата-әсәләр, уҡыусыларҙан торған өс таған берҙәм булғанда, тағы ла юғарыраҡ уңыштарға өлгәшербеҙ, тип ышанам.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров төбәктең оператив штабы ултырышын үткәрҙе. Унда республиканың профилле министрлыҡтары һәм ведомстволары, оператив хеҙмәттәр һәм көс структуралары етәкселәре, шулай уҡ Башҡортостан предприятиелары вәкилдәре ҡатнашты. Көн тәртибенә төбәктең инфраструктура һәм сәнәғәт объекттарын террористик хәүефтән һаҡлауҙы тәьмин итеү мәсьәләләре ҡуйылды.

✓Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Радий Хәбиров ни өсөн республикала Һаулыҡ һаҡлауҙы үҫтереү буйынса совет ойоштороуҙары хаҡында һөйләне: "Ябайыраҡ әйткәндә, эшебеҙҙе бер аҙ үҙгәртәбеҙ. Быға тиклем "Һаулыҡ һаҡлау сәғәттәре"н үткәрһәк, хәҙер иһә Һаулыҡ һаҡлауҙы үҫтереү буйынса советтар була. Регламентта уны йылына кәмендә дүрт тапҡыр уҙғарырға тип яҙҙыҡ. Көнүҙәк мәсьәләләрҙе тикшерербеҙ", - тине ул.

✓Башҡортостанда Мәғариф һәм фән министрлығы ҡарамағындағы Балалар советы тураһында положение раҫланды. Балалар советы Мәғариф министрлығына дәүләт мәғариф сәйәсәтен тормошҡа ашырыуҙа булышлыҡ итеү маҡсатында ойоштоpола. Совет 12-18 йәшлек 12 ағзанан тора. Ул мәғариф өлкәһендәге урындағы үҙидара органдарының тәҡдиме буйынса конкурс нигеҙендә формалаштырыла. Совет ағзалары мәғариф системаһын яҡшыртыу, уҡытыу сифатын күтәреү, яңы методикалар һәм технологиялар индереү буйынса тәҡдимдәр әҙерләүҙә ҡатнаша ала.

✓Башҡортостанда хәрби хеҙмәткә саҡырыу комиссиялары составтары үҙгәртелде. Республика Башлығы Радий Хәбировтың тейешле указына ярашлы, республиканың бер нисә муниципалитетында комиссиялар составына район һәм ҡала хакимиәте башлыҡтары индерелде.

✓Башҡортостандан Олимпия һәм Паралимпия уйындарында, башҡа ярыштарҙа ҡатнашыусыларға, еңеүселәргә түләүҙәр арттырылды. Республика Премьер-министры Андрей Назаров хәбәр итеүенсә, хәҙер айлыҡ стипендия кәмендә - 8 мең һум, иң күбендә - 38 мең һум. Стипендияны 13 йәштән алырға мөмкин. Шулай уҡ олимпиясылар тәрбиәләгән тренерҙарға аҡса бирелә. 2023 йылдан уларға ғүмер буйына дәүләт стипендиялары түләнә, бындай түләү Башҡортостанда ғына бар.

✓Быйыл яңы йыл каникулдары 11 көн була. Улар 2025 йылға тиклем өс көн ҡалғас, 2024 йылдың 29 декабрендә башлана. Хөкүмәттә раҫланған Яңы йыл һәм Раштыуа байрамдары графигына ярашлы, шәмбе, 28 декабрҙәге ял көнө дүшәмбе, 30 декабргә күсерелде. Шуға күрә йылдың һуңғы эш аҙнаһында алты көн эшләйбеҙ. Быйыл 7 ғинуарҙағы ял иһә 31 декабргә күсерелде.

ҠАЛА ТЕМАҺЫ

# ИКЕ КЕШЕГӘ - БЕР МАШИНА



**1950-1980 йылдарҙа Өфө ҡалаһының төп торлаҡ райондары һәм урамдары халыҡтың автомобилгә эйә булыу кимәле бөгөнгө менән сағыштырғанда күпкә түбән булған шарттарҙа проектлана. Бөгөн Башҡортостандың баш ҡалаһында йөмғеһе ярты миллиондан ашыу, йәғни ике кешегә бер машина иҫәбендә еңел транспорт сараһы бар. Ҡайҙа етте, шунда ҡуйылған, шул сәбәпле коммуналь һәм ашығыс хеҙмәт эшсәндәренә ҡамасаулаусы шәхси автомбилдәр айырыуса торлаҡ йорт ихаталарында киҫкен проблема килтереп тыуҙырҙы. Былар бөтәһе лә властарҙы саралар комплексы күрергә мәжбүр итә.**

## Кисектерелгән проект

Туҡталҡалар менән айырыуса ҡатмарлы хәлдәр ҙур ҡалаларҙың эш һәм мәҙәни үҙәктәрендә килеп тыуа. Уны хәл итеүҙең бер юлы - түләүле туҡталҡалар системаһын булдырыу. Ләкин Өфөлә оҙаҡ ваҡыттар буйы был саранан баш тартып килделәр. Өфө ҡала советы тарафынан түләүле туҡталҡалар тураһында положение бары тик 2018 йылда ғына ҡабул ителде. Документта әйтелеүенсә, түләүле туҡталҡаларҙың адреслы исемлеге һәм уларҙы файҙаланған өсөн тарифтар Өфө мэрияһы ҡарары менән раҫлана.

Ҡала властары түләүле туҡталҡалар менән файҙаланыуҙы 2022 йылда уҡ башларға ниәтләгәйне, илдә килеп тыуған ҡатмарлы иҡтисади хәлдәр арҡаһында ул бойомға ашырылмай ҡалды. Был мәсьәләне 2024 йылдың 21 февралендә Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев ҡайтанан күтәреп сыҡты. "3,5 меңдән ашыу түләүле туҡталҡа урыны булдырырға ниәтләйбеҙ, был ҡала урамдарын байтаҡҡа бушатасаҡ", - тине Өфө мэры. Йәйге осор ҡала властары был мәсьәлә буйынса өфөләрҙән онлайн-һорау алыуҙар үткәрҙе. Уның һөҙөмтәһенән күренеүенсә, респонденттарҙың 70 проценты тап баш ҡаланың үҙәк өлөшөндә машинаһын ҡуйыу урыны әҙләп, ҡыйынлыҡтар кисереүе хаҡында белдерә. Граждандар фекерен иҫәпкә алып, Достоевский, Карл Маркс, Киров, Коммунистик, Ленин, Мостай Кәрим, Октябрь революцияһы, Пушкин һәм Чернышевский урамдары буйлап 1 188 урынға түләүле адреслы туҡталҡа исемлеге проекты эшләнде.

Машинаны бер сәғәткә ҡалдырыу хаҡы тәүҙә 40 һум тип билдәләнгәйне. Был сумма РФ Транспорт министрлығы тәҡдиме менән ҡала буйынса уртаса эш хаҡы һәм йәмәғәт транспортында йөрөү тарифына ярашлы билдәләнде. Туҡталҡа өсөн түләүҙе мобиль ҡушымта, СМС-хәбәр, банк терминалдары аша һәм QR код ярҙамында башҡарырға була. Түләү күләме тәжрибә өлкәһендәге бөтөн биләмәләр өсөн дә бер тигеҙ буласаҡ, тип ҡаралды. Тарифҡа төҙәтмәләр проект эшкә ҡушылғандан һуң бер йыллап самаһы ваҡыт үткәс, автоһәүәҫкәрҙәр араһында урындарға булған ихтыяж һәм урындарҙы файҙаланыу кимәленә ҡарап индерәләсәк, тип ҡарала. Шул уҡ ваҡытта Өфөлә түләүле туҡталҡалар проектын эшкә ҡушыу ваҡыты билдәләнмәнә лә, үҙәк урамдарҙа буласаҡ түләүле туҡталҡа урындарында зәңгәр төҫтәге билдәләр күренә башланы. Ҡала хакимиәтенән белдереүҙәренсә, түләүле машина урындары булдырыу хаҡындағы ҡарар адреслы исемлек раҫланғас ҡына ҡабул ителәсәк.

## Тәртип саралары

Машиналарҙы ваҡытлыса һаҡлауға ҡуйыу урындары буйынса ҡатмарлы хәл транспорт күп йөрөгән магистралдәрҙә генә түгел, бөгөнгө күләмдәге транспорт саралары өсөн ҡулайлаштырылмаған торлаҡ йорт ихаталары өсөн дә ҙур проблема. Өҫтәүенә, был мәсьәләне күпселек водителдәрҙең тәртибе лә ҡатмарлаштыра. Машиналарын коммуналь ҡалдыҡтар контейнерҙары торған майҙансыҡ янында ҡалдырып, сүп-сарҙы ихатанан алып сығыу эшен тулыһынса тотҡарлайҙар.

2019 йылда был мәсьәләгә республика властары иғтибарын йүнәлтте һәм шунан һуң Өфөлә ошо йәһәттән тәртип булдырыу саралары ҡабул ителде. "Бер яҡлап, беҙ туҡталҡалар буйынса тәртип булдырһаҡ, икенсе яҡтан, машина ҡуйыу урындарын арттырасаҡбыҙ", - тигәйне республика Башлығы Радий Хәбиров. Һәм, ысынлап та, ихаталарҙа машиналарҙы дөрөҫ ҡуймаған өсөн тос ҡына күләмдә административ штраф билдәләнде, ләкин ҡайһы бер тәртип боҙоусыларҙы был да туҡтата алманы. Мәҫәлән, 2024 йыл башынан Өфөлә сүп-сар контейнеры торған майҙансыҡ янында машинаһын ҡуйғандары өсөн транспорт хужаларына ҡарата 13,7 мең административ протокол тултырылды. Штрафтарҙың дөйөм суммаһы 19,7 млн тәшкил итте. Тәртипте ҡабатлап боҙған өсөн икеләтә күләмдә штраф түләтелде.

## Яңы урындар

Өфөлә штраф саралары менән бер рәттән, булған туҡталҡа урындарын һөҙөмтәле файҙаланыу буйынса ла эш алып барыла. Мәҫәлән, урам-юл селтәрен төҙөү һәм яңыртыу сиктәрендә 2022-2024 йылдарҙа ғына ла 893 туҡталҡа урыны булдырылды, шул иҫәптән, уларҙың 584-е - яңы төҙөлөүсе Яркий һәм Кузнецов затонында эшләнде. Ә шулай ҙа иң күп машина урындары "Башҡорт ихаталары" программаһы барышында төҙөлдө. Ни бары өс йыл эсендә торлаҡ йорттар янында 4 677 машина-урын барлыҡҡа килде. Өфөлә шулай уҡ туҡталҡа урынын биләп ултырған ташландыҡ, хужаһыҙ һәм боҙоҡ машиналарҙы утилгә алып китеү буйынса ла эш туҡтағаны юҡ. 2019-2024 йылдарҙа ана шундай 6 484 автомобиль металл һынығына оҙатылды.

**Сергей НИКОЛАЕВ.**

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## АБДУЛЛИН ӘНҮӘР АБДУЛЛА УЛЫ

Әнүәр Абдулла улы Абдуллин 1917 йылдың 5 июнендә Өфө губернаһының Бәләбәй өйәҙе Иҫке Дөмәй ауылында (хәҙерге Башҡортостан Республикаһы Илеш районы Дөмәй ауылы) крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. 1934 йылда Дәүләкән фабрика-завод училищеһын тамамлай. 1939 йылда Туймазы район хәрби комиссариатынан Эшсе-крәҫтиән Ҡыҙыл Армияһына хәрби хеҙмәткә саҡырыла. Монголияла торған 57-се танк дивизияһында хеҙмәт итә.

1941 йылдың июненән бирле Бөйөк Ватан һуғышының Карел, Көнбайыш, Сталинград, Дон һәм 3-сө Белорус фронттарының яу яланддарында алыша. Киевты обороналауҙа, Мәскәү һәм Сталинград өсөн алыштарҙа, Белоруссияны, Балтик буйын азат итеүҙә һәм Көнсығыш-Пруссия операцияларында ҡатнаша. Һуғыш ваҡытында дүрт тапҡыр яралана.

1944 йылдың 21 августында Каунас ҡалаһынан көнбайыштараҡ Клепы ауылы районындағы алышта орудие расчеты командиры өлкән сержант Әнүәр Абдуллин батырлыҡ күрһәтә. Батарея позицияһына дошмандың 16 танкыһы, 25 бронетранспортеры һәм полкка яҡын пехотаһы һөжүм итә. Ҡаршы ут асып, Абдуллиндың расчеты дошмандың алдан килгән танкыһын яндыра, ә ҡалғандары батареяны флангтарҙан урап үтеп ҡамарға тырыша. Дошмандың көслө артиллерия һәм пулемет уты аҫтында Абдуллиндың расчеты орудиены 300 метрға ситкәрәк күсерә һәм ҡабаттан ут аса. Алыш һөҙөмтәһендә гитлерсылар, ике танкыһын, ике йөҙгә яҡын һалдатын һәм офицерын юғалтып, кире сигенергә мәжбүр була.

СССР Юғары Советы Президиумының 1945 йылдың 24 мартындағы указы менән өлкән сержант Әнүәр Абдулла улы Абдуллинға Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. Ул Совет армияһы частарында Маньчжурияла Квантун армияһын тармар итеүҙә ҡатнаша. Һуғыш тамамланғандан һуң 1946 йылдың июлендә Башҡортостанға ҡайта.

1948 йылдан 1959 йылға тиклем КПСС-тың Бүздәк һәм Ҡырмыҫҡалы район комитеттарында эшләй. 1960 йылда КПСС Үҙәк Комитеты ҡарамағындағы юғары партия мәктәбен тамамлай. Шул уҡ йылда КПСС-тың Совет район комитеты секретары булып эшләй. 1959 йылдан 1986 йылда пенсияға киткәнгә тиклем М.Б. Фрунзе исемендәге Өфө резина техник изделиелар заводында партком секретары, цех начальнигы (1965), режим буйынса директор урынбаҫары (1970) булып, һуңынан заводтың граждандар оборонаһы штабында эшләй. Әнүәр Абдулла Улы Абдуллин 2002 йылдың 28 октябрендә Өфөлә вафат була, Өфөнөң көньяҡ зыяратында ерләнгән.

Наградалары: Советтар Союзы Геройы, "Алтын Йондоҙ" миҙалы, Ленин, Октябрь Революцияһы, I дәрәжә Ватан һуғышы, II дәрәжә Ватан һуғышы, Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары, "Батырлыҡ өсөн" һәм "Сталинградты обороналаған өсөн" миҙалдары.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Һары мәтрүшкә

❖ Ашҡаҙандың сей яра ауырыуы булғанда һары мәтрүшкә үләнен йылытылған көнбағыш майына 1:2 нисбәттә ҡушырға, 3 сәғәт бөҫтә тотоп, 2 аҙна тәнәтергә (ваҡыты-ваҡыты менән болғатып торорға), һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ас ҡарынға 1-әр ҡалаҡ эсергә. Дауаланыу - 1 ай.

❖ Ашҡаҙандың сей яраһынан тағы шундай дауа бар: тигеҙ өлөштә шиңмәҫгөл сәскәһен (бессмертник) һәм һары мәтрүшкә үләнен алырға. Әҙерләмәнең 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, төнәтергә һәм һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 2-шәр ҡалаҡ эсергә.

❖ Тире майлы, күҙгәнәсле һәм тирләүсән булғанда иртәнсәк битте һары мәтрүшкә, шалфей, үгәй инә үләне, меңъяпраҡтан эшләнгән һалҡын төнәтмә менән сайҡау файҙалы. Уны әҙерләү өсөн 1 ҡалаҡ үлән йыйылмаһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм ауыҙы ябыҡ һауытта төнгөләккә ҡалдырырға.

Тағы ла һары мәтрүшкә, ҡуҙғалаҡ һәм үгәй инә үләне япраҡтары, календула сәскәһен бер тигеҙ өлөштә алып ваҡларға һәм ҡушырға. Әҙерләмәгә 1:2 нисбәтендә ҡайнар һыу ҡойорға. Шунан ҡайнатып алырға һәм һыуынғанын көтөргә. Был һыуҙа бер нисә ҡат марляны сылатырға һәм шуны таҙа биткә 15-20 минутҡа ябырға, аҙағынан йылы һыу менән йыуынырға.

❖ Мастит (түш шешеүе) булғанда һары мәтрүшкә бешкән һыуҙың 1 ҡалағына 2 ҡалаҡ аҡ май ҡушып, елһенгән имсәккә һыларға. Был осраҡта һары мәтрүшкә һыуы былай әҙерләнә: 2 ҡалаҡ һары мәтрүшкә үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ҡапҡас ябып, бөҫтә 30 минут йылытырға һәм 15 минут төнәтеп һөҙөргә.

❖ Нефриттан бер тигеҙ өлөштә һары мәтрүшкә, арыҫлан ҡойроғо, ала миләүшә, баҫыу ҡыҙҡбыуыны үләндәрен алырға. Әҙерләмәнең 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, бөҫтә 10 минут йылытырға, 30 минут йылыла төнәтергә. Хроник пиелонефрит ҡырҡыулашҡан осорҙа төнәтмәне йылы көйөнсә көнөнә 2-3 тапҡыр эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ Бәйғәмбәребеҙҙән саллаһу ғәләйһи үә сәлләм "Уң ҡулың биргәнде һул ҡулың белмәһен" тигән хәҙис тә бар. Берәй кешегә яҡшылыҡ эшләп тә, уға был хаҡта өндәшмәй ҡалыу - Аллаһы Тәғәлә алдында мәртәбәләргә сауаплыраҡ.



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Ҡара сәпсәү
**(Черныш)**



Сыйырсыҡтан саҡ ҡына ҙурыраҡ, тура суҡышлы. Арҡаһы йәшкелт ҡара, ҡорһағы аҡ, муйыны һәм түше сыбар. "Тлииит-тлит-тлит" йәки "длюой-длюй-длюй" тип осоп китә.

Рәсәйҙә киң таралған ҡош. Бәләбәй ҡалҡыулығында, Өфө платоһында осрай. Көньяҡ Уралдың урманлы зонаһынан Ҡаратау һәм төньяҡтан Уралтау һырттарына тиклем оя ҡороп йәшәй. Урал аръяғында осрағаны юҡ.

Урманлы һаҙлыҡтарҙы, күлдәрҙе, йылғашишмә буйҙарын үҙ итә. Ояһын башлыса ағасҡа ҡора. Ерҙә, ағас төпһәләрендә оя ҡороуы ла ихтимал. Ата ҡош инә ҡош менән бер рәттән йомортҡаларҙы баҫа. Бәпкәләр сыға башлағас та ҡоштар артыҡ тауышлана башлай. Йомортҡанан сығып, бер аҙ кибенгәс тә, бәпкәләр ергә ағастан үҙҙәре һикереп төшә. Башта уларҙы ата менән инә ҡош бергәләп ҡарай, аҙаҡтан был вазифа ата ҡошҡа ғына тороп ҡала. 3 аҙналыҡ бәпкә оса ала. Европаның һәм Азияның көньяғында, Африкала ҡышлай.

## Божор сәпсәү
**(Фифи)**



Ҡара сәпсәүҙән вағыраҡ. Ҡара арҡаһында сыбар таптары бар. Һомғол, оҙон аяҡлы. "Фи-фи-фи" тип тауыш сығара. Ояһын ергә ҡора. Башҡортостанда осоп китеп барышлай ғына туҡтап китә, шулай ҙа оя ҡороп йәшәүселәр ҙә осрай. Өфө тирәһендә, Ҡаҫмарт, Урал йылғалары үҙәндәрендә тап булғаны бар.

Ояһына үләнде мул итеп түшәй. 4 йомортҡа һала. 22-24 көн буйына икәүләп сиратлап баҫалар. Бәпкәләр сыҡҡан саҡта божор сәпсәү бик һаҡка әйләнә, кешенең иғтибарын йәлеп итмәҫкә тырыша. Ояһына яҡын йөрөгән йырҡыс ҡоштарҙы ла тауышланып ҡыуа. Шуныһы ҡыҙыҡ, инә ҡош бәпкәләр сыға башлағанға тиклем үк уларҙы ата ҡош ҡарамағына ҡалдырып китә, йәки иртәрәк йылы яҡҡа оса. 3 аҙналыҡ бәпкәләр осорға һәләтле була.

Август аҙағы, сентябрь башында йылы яҡҡа китә башлайҙар. Яңғыҙ ҙа, күмәкләп тә осалар. Африка, Көньяҡ Азияла ҡышлай.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

АЛДАШАЛАР!

# ҮӘТ, МӘШШИННИКТӘР!




**Бала сағымда оло кешеләрҙең шаян малайҙарҙы "Ах, мәшшинник!" тип ҡыҙҙырғандарын ишеткеләй торғайным. Ысынлап та, ул һүҙ тик "шуҡ" тигәнде генә аңлаталыр ҙа, шундайҙар хаҡында әллә ни боҙоҡ әҙәмдәр түгелдер тигән тойғо ҡала ине. Минең үҙемә лә бәләкәй саҡта шулай тип бармаҡ янағандары хәтеремдә.**

Әммә һуңғы осорҙа кешеләрҙе алдап, һемәйтеп йөрөүсе мутлашыусылар тураһында ишетелә башлағас та, уларҙан шикләнеү кәрәклеген аңланым. Телефон аша мутлашыусы боҙоҡ әҙәмдәрҙең ябай кешеләрҙе "төп башына" ултыртыуҙары тураһында көн һайын уҡып торабыҙ. Башҡортостанда ғына аҙнаһына әллә нисә миллион һумға отолоуҙары хаҡында телевизорҙағы яңылыҡ тапшырыуҙарында, интернетта хәбәрҙәр тулы. Башлыса, оло йәштәгеләр әләгә быңдай тоҙаҡҡа... Телефонымда берәй таныш булмаған нәмәләр килеп сығыу менән уларыма, йә килендәремдең береһенә мөрәжәғәт итә башлайым. Йәштәр ундай-быңдай нәмәлә һиҙгерерәк бит. Шулай бер көн, иртәнге туғыҙҙар булғандыр, көтмәгәндә телефоныма биш йөҙ һум аҡса килде. Әле унда аҡсаһы ла байтаҡ ҡына ине, һалыр ваҡыты ла етмәгән. Мәле етеп килһә, ғәҙәттә, үҙем йә иһә хәләл ефетем, йә булмаһа улдарымдың береһе кәрәк сумманы тулыландырып торабыҙ. Әлеге аҡса килгәс тә, яҡындарымдан һораштырып, уларҙың береһенең дә минең телефонға аҡса һалмағанын белдем... Шунда уҡ әлеге уй башыма килде, "кәбе берәй мәшшинник булмағайы..."

Телефонымды тотоп, һаҡлыҡ банкына юлландым. Ошо хәлде аңлатып биргәс, банк хеҙмәткәре бер йәш ҡыҙ: "Ағай, һеҙҙең телефонға кем аҡса һалыуын хәҙер асыҡлау мөмкин түгел, был мутлашыусыларҙың сираттағы эшенә оҡшаған. Һеҙгә яҡын арала берәй сәйер шылтыратыу йә иһә смс килеүе бик ихтимал. Бер кемгә лә яуап бирмәгеҙ. Улар менән аралаша башлау менән бәлә-ҡазаға тарыуығыҙ бар", - тип иҫкәртте. Мин, әлбиттә, үҙем дә шуға көйләнгән инем. Яҡындарыма: "Мине юғалтмағыҙ, күпмелер ваҡыт бәйләнешкә инмәй торам", - тип смстар ебәргеләнем. Ҡолаҡҡа ҡаты булараҡ, телефон шылтырауҙарына былай ҙа бер ҡасан дә яуап бирмәйем. Ә бына смстарҙы яуапһыҙ ҡалдырмайым.

Сәйер хәбәрҙе көнө буйы көтөп йөрөнөм. Һәм, ниһайәт, шул көндө үк кис бер яҡын дуҫымдан смс килеп етте. "Һорарға ла уңайһыҙ. Миңә 2-3 сәғәткә бурысҡа 50 мең биреп тор әле. Картамдың лимиты бөткән. Бер кешегә аҡса ебәрә алмай аҙапланам..." Тик ул урыҫ телендә яҙылған ине. Ә был дуҫым менән мин бер ҡасан дә урыҫса яҙышҡаныбыҙ юҡ. Өҫтәүенә, дуҫым бик белемле, ә был хәбәрҙә әллә нисә хата бар. Дуҫыма үҙемдең телефоным аша бер ни ҙә яҙып тормаҫтан, ҡатынымдың телефонынан уға шылтыраттым. Хәл-әхүәл һорашып алғас: "Һин бөгөн миңә берәй хәбәр яҙмаһыңмы?" - тигән һорау бирҙем. "Юҡ, кисәнән алып бер ни ҙә яҙғаным юҡ, - тине ул. - Ә ни булған?" Дуҫыма әлеге хәлде һөйләп бирҙем. "Мин бер ниндәй ҙә аҡса һораманым, ебәрә күрмә ул аҡсаны",- тине дуҫым. Һуңғараҡ, уның ватсабын мутлашыусылар емереп ингәнлеге хаҡында беленде...

Мәшшинниктәрҙең хәйләһенең сиге юҡтыр: көн дә смс-хәбәрҙәр алышҡан иң яҡын дуҫыңды һайлаусан да икән улар (дуҫым менән ватсап аша сәләмләшмәгән көнөм юҡ). Банкка барып, ошо хәлде һөйләп биргәс, улар банк карталарын страховкалап, башҡа саралар күреп ҡуйырға көнәш иттеләр. Шуларҙы эшләп бөткәс, иркен тын алып ҡуйҙым, әлхәмдүлиллаһ.

Сираттағы мәҡәләмә бик шәп сюжет та булғас, шунда уҡ ултырып яҙа ла башланым. Ваҡиғаның шулай яҡшы бөтөүенә шатланып, тынысланып, яҙмамды ла ошоноң менән тамамлап ҡуйырға ла ниәтләгәйнем дә, әммә...

Иң ҡыҙығы алда булған да баһа! Әлеге мутлашыусылар хаҡында, "шәп кешеләнеп", туғандарыма, таныштарыма смс-тар яҙғылап, улар менән бик әүҙем рәүештә "тәжрибә уртаҡлаша" башланым. "Миңә ошо арала мәшшинниктәр бәйләнеп маташты..." - тип башлап алып китәм хәбәремде. Һәр береһенә әлеге хәлде ентекләп, эҙмә-эҙ яҙып, яҡындарыма хәбәрҙәр ебәрәм, "һаҡ булығыҙ" тип барыһын дә иҫкәртеп тә ҡуям.

Шулай бер көн, сираттағы мәртәбә ватсап аша баш ҡалала йәшәгән апаймдың хәлен белешәм. Мутлашыусыларҙы нисек "еңеүем" хаҡында ла маҡтанырға онотмайым: "Беләһеңме, апай, мине ошо арала мутлашыусылар тотоп маташты. Иң башта (фәлән числола) телефоныма аҡса һалдылар. Кемдән икәне лә билдәһеҙ..."

Ышанаһығыҙмы, апайым мине нимә тип аптыратты? "Хәлил, ана шул көндө иртәнсәк мин һинең телефоныңа 500 һум һалғайным бит. Саҙаҡа итеп..." "Был турала нишләп миңә хәбәр итмәнең?" - тинем гәжәпләнеп. "Әллә, шулай хәйерлерәк булыр тип уйланым..."

Ҡәҙерле дуҫтар, бына шул саҡ мин үҙем өсөн ғәйәт ҙур асыш яһаным. Ысын! Күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ әле. Апайымдан ана шул 500 һум килмәгән хәлдә, мутлашыусы хаҡында уй минең башыма ла инеп сыҡмаҫы көн кеүек асыҡ бит. Әлеге дуҫымдың телефонынан килгән смс-хәбәргә яуаптар яҙа башлап, теге мутлашыусының ҡармағына һис шикһеҙ эләгәсәк инем (Аллаһ һаҡлаһын!). Бәлки, әллә ҡалай арбап, тағы күпмелер суммаға башты әйләндереү ихтималлығы хаҡында уйлап, сәстәрем үрә торҙо. "Төп башына" ултыртҡандарын үҙем дә, дуҫым да белмәҫ инек...

Әлбиттә, ғәжәпләнеүемдең сиге булманы. Был - һис кенә лә осраҡлы хәл түгел, Аллаһы Тәғәләнең мөғжизәһе - оло ярҙамы! Шул бәләҡазанан иҫкәртеү өсөн Раббыбыҙ апайымды сәбәп итеп тә ҡуйған бит. Икенсенән, динебеҙҙе ентекләп өйрәнеп йөрөгән кеше булараҡ, тағы шуны аңланым: әлеге аҡсаны телефоныма һалғас та, яҡынымдың ошо хаҡта хәбәр итмәүендә лә оло хикмәт бар (телефоныма аҡса һалып, шул хаҡта апайым миңә хәбәр иткән хәлдә лә мутлашыу-фәлән иҫемә лә инеп сыҡмаған булыр ине шул). Үҙе лә дин юлында булған Сулпан апайымдың саҙаҡаны миңә - туғанына белендермәй генә һалырға ниәт итеүе шәриғәт талаптарына тап килеп кенә тора. Бәйғәмбәребеҙҙән саллаһу ғәләйһи үә сәлләм "Уң ҡулың биргәнде һул ҡулың белмәһен" тигән хәҙис тә бар. Апайым динебеҙҙең тап ана шул ҡанунына ярашлы ғәмәл ҡылған. Сөнки берәй кешегә яҡшылыҡ эшләп тә, уға был хаҡта өндәшмәй ҡалыу - Аллаһы Тәғәлә алдында мәртәбәләргә сауаплыраҡ.

Өсөнсөнән, әлеге яҡын дуҫым менән тик туған телебеҙҙә генә һөйләшеп-яҙышып йөрөүебеҙҙең дә файҙаһы ныҡ тейгән, тип уйлап ҡуйҙым. Сөнки уның телефонынан миңә урыҫса хәбәр килеүе лә шик тыуҙырып, мутлашыусыларҙан һаҡ булырға ишара булды бит...

Һүҙ аҙағында. Кемдер быны "осраҡлы хәл", икенселәр "мөғжизә" тип атауы ла ихтимал. Әммә, минең ныҡлы инаныуымса, ошо хәлгә тарыуым, нисек унан ҡотолоп китеүем, әлбиттә, Аллаһы Тәғәлә тарафынан миңә әллә ҡасан уҡ тәҡдир итеп яҙылған. Барыбыҙға ла Раббыбыҙ Үҙе ебәргән һынауҙарҙы ана шулай уңышлы ғына кисерергә насип итһен. Мутлашыусыларҙан һаҡ булайыҡ, туғандар!

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Граф В.А. Перовский**

**(1833-1842 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған).**

Хива экспедицияһына, ул саҡтағы иҫәп менән, бер миллион һум аҡса ҡулланыу ҡаралған була, тик был ғына түгел. Поход өсөн кәрәкле провиант һәм башҡа әйберҙәр Ырымбурҙан 1839 йылдың йәйе буйына аттар менән далалала махсус ҡоролған ваҡытлы нығытма пункттарына, Хиваға бара торған этап урындарына ташыла. Бының өсөн башҡорттарҙың ике йә иһә өс атлы арбаларҙан торған нарядтары ебәрелә. Һуңғылары барыһы ла далала ҡырылып бөтә. Арбаларҙы ташлап китәләр, йолҡошҡа әйләнеп бөткән, сирле кешеләр Ырымбурға ҡайта; бында уларға кеше башына 5-әр һум ассигнациялар бирелеп, өйҙәренә ҡайтарып ебәрелә. Был башҡорттар Пермь һәм Вятка губерналарынан һәм Ырымбурҙан бик алыҫта булған Минзәлә, Бөрө, Бөгөлмә һәм башҡа өйәҙҙәрҙән саҡырылған була. 1839 йыл йот була; икмәк хаҡы ботона 3 һум ассигнацияға етә, бесәндең бер йөгө 10 һумға һәм унан да күберәк хаҡҡа һатыла, кейем-һалымы туҙып бөткән ярлы кешегә нисек итеп 5 һумға, йөҙәр саҡрым ер үтеп, өйөнә ҡайтып етергә була? Бик аҙҙарының ғына, аттары булған хәлдә лә, улар хатта ҡала урамдарында ла йүнләп йөрөй алмай. Ошо йылда башҡорттарҙың 5 меңгә яҡын аты үлә.

Перовскийҙың ғорур холҡо Хива походының уңышһыҙ тамамланыуы арҡаһында бик ныҡ ҡаҡшай, һәм уның үҙенә юғары властарҙан бик күп ауыр һүҙҙәр ишетергә тура килә. Петербургҡа килгәс, хәрби эштәр министры Чернышев уны батша ғали йәнәптәренә индерергә теләмәгән, йәғни уның килеүе хаҡында батшаға белдермәгән, тип һөйләйҙәр, һәм Перовский үҙенә бик ауыр тәьҫир иткән шик-шөбһәләренән арыныу әмәлен тапҡан.

Батша Николай Павлович смотрҙа йә иһә манежда ғәскәр парадындамы булған бер мәлдә ул батша ғали йәнәптәренең генерал-адъютанты янынына барған, ә уның батша эргәһендә булыу хоҡуғы була; ул, Перовскийҙы күреү менән, уның ҡасан килеүе һәм ни өсөн күренмәүе хаҡында яғымлы итеп һорашҡан. Перовский шул саҡта Чернышевҡа ымлап яуаплаған. Смотр тамамланғас, Перовскийҙы батша үҙенең экипажына ултыртып, һарайға алып килә.

1840 йылдың йәйен һәм 1841 йылды Перовский Ырымбурҙа йәшәй, ноябрь аҙаҡтарында Петербургҡа ҡайта, унан 1842 йылда, биләгән вазифаһынан бушатылып, Италияға китә. Гәзиттәрҙә баҫылған хәбәрҙәрҙә яҙылғанса, Перовский Берлинда прусс короле менән күрешкәндә тегенеһе уны Хива походы буйынса беләмен тип, төрттөрөп ҡуйған ти.

Хива походында ҡатнашҡан барса офицерҙар, генералдарҙы ла иҫәпкә алып, дәүләт наградаларына лайыҡ була, уларға юғарыраҡ чиндар, ордендар һәм хатта аҡсалата бүләктәр тапшырыла. 22-се дивизия начальнигы, генерал-лейтенант Толмачев тәүҙә Аҡ Бөркөт ордены менән бүләкләнергә тейеш булһа ла, уға уның урынына Һарытау губернаһында 3 мең десятина күләмендә ер бирелә. Ырымбур казак ғәскәре атаманы, ул ваҡытта ғәскәр командующийы Молоствов, сираттағы дәрәжә тәртибе буйынса ҡаралған орден ала; Циолковскийға 1-се дәрәжә Анна ордены бирелә, әммә ул һуңынан үҙенең һорауы буйынса отставкаға сығарыла. Офицер хеҙмәте өсөн пенсияға сыҡҡанда бер ай йылға тиңләнгән, әлеге поход кампания тип иҫәпләнгән.

Циолковский, отставкаға сыҡҡас, ҡатынының Ырымбур өйәҙендәге ауылында йәшәй. Ул, үҙенең крәҫтиәндәре менән бик ҡаты мөғәмәлә иткәнлектән, улар тарафынан 1841 йә иһә 1842 йылда үлтерелә. Крәҫтиәндәр, уны ерләгәндән һуң, мәйетен ҡаҙып сығарып, ҡамсылар менән ярып, кеше танымаҫлыҡ хәлгә еткерә; уның туғандары мәйетте Ырымбурға алып килеп, дөйөм зыяратта ерләйҙәр. Уның өс улы ла үлгән инде; береһе ябай ғына чиновник званиеһында була; оло улы Виталий, бер нисә өс йыллыҡта дворяндар предводителе булып хеҙмәт итһә лә, Ырымбур губернаһы барлыҡҡа килгәндә яңынан һайланмай, бик ярлы йәшәй, аҡсаларҙы әрәм-шәрәм иткән өсөн суд хөкөмөнә тарттырыла һәм 1889 йылда вафат була; Николай мировой посредник булып хеҙмәт итә, әммә 1868 йылда штаттан сығарыла, урман кампанияһына һал менән ағыҙылып килтерелгән ағастарҙы яр буйындағы ауыл кешеләре урламаһын өсөн күҙәтеүсе вазифаһын биләй, ауыл хужалығы эштәре менән шөғөлләнеп көн итә; 1891 йә иһә 1892 йылда 72 йәшендә вафат була.

1840 йылдың октябрендә Ырымбурға Афғанстандан инглиз армия хеҙмәтендәге майор килә, уны Англия хөкүмәте Хива походының ни сәбәпле уңышһыҙ тамамланыуын асыҡларға ебәргән була; ул Ырымбурҙа бер ай самаһы ғына йәшәй, беҙҙең өйөбөҙҙән артыҡ йыраҡ булмаған чиновник Галявинскийҙың өйөндә фатирҙа тора. Ул өй 1879 йылда янып юҡҡа сыға. Инглиз майоры Перовский менән осрашмағандыр; ул был ваҡытта, моғайын, Петербургта булғандыр.

Ырымбур - Ырымбур төбәгенең төп начальнигының баш пункты һәм йәшәү урыны - 30-сы йылдар башында, бында генерал Перовский килгән саҡта халҡы 5 йә иһә 6 меңдән артыҡ булмаған бәләкәй ҡала була. Өйҙәр барыһы ла ағастан һалынған тиерлек, 3 кенә тәҙрәле, иң яҡшы тигәндәре 5 тәҙрәле, тәпәш кенә, хатта ярым планканан һалынып, бер ҡыйыҡ аҫтында бер юлы ике хужа йәшәп, һәр ҡайһыһы үҙ ҡапҡаһынан сығып йөрөгән. Ҡырылып бөтөп барған өйҙәрҙә, ер өйҙәрҙә лә көн иткән кешеләр була, уларҙың хужалары бик ярлы булыуҙары арҡаһында йорт-ҡураларын яҡшырта алмай. Перовский 1835 йылда махсус комиссия булдыра һәм уға ҡалалағы барса өйҙәрҙе ҡарап тикшереп, туҙған өйҙәрҙе ике йә иһә өс йыл эсендә һүтеп алырға, уларҙың хужаларына ошо ваҡыт эсендә план буйынса яңы өйҙәр һалырға бойора. Быны үҙҙәренең аҡсаһына эшләй алмағандарға шулай уҡ иҫке өйҙәрен һүтеп алырға, бушҡа 50 бүрәнә һәм 50 һум ассигнация алырға тәҡдим ителә, ә һуңынан каруанһарай һәм татар зыяраты араһында яңы ғына төҙөлә башлаған ауылға күсергә ҡушыла, бында ер уларға бушлай бирелә. Ҡалала иҫке өйҙәрҙән бушаған урындар йәнәш йәшәгәндәргә бирелә, тик улар элекке хужаға түләнгән пособие хаҡын үҙҙәре түләргә тейеш була, әгәр ошо урындың хаҡы түләнгән пособиенан кәмерәк булған осраҡта, уларға ағас хужалыҡ өсөн әҙерләнгән урман иҫәбенән бирелә.

Шулай итеп, ҡала бер ҡарарлығы ҡалмаған бәләкәй өйҙәрҙән, ер өйҙәрҙән таҙартыла; ихаталар киңәйтелә, һәм барса урындар ҙа йәмләнеп китә. Тиҙҙән халыҡ яҡшы өйҙәр һалып керә башлай. Байлыҡтары булмағандарға, бигерәк тә чиновниктарға, төҙөлөшкә етерлек ағасты Перовский хужалыҡ эштәре өсөн әҙерләнгән урмандан аҙаҡтан түләү шарты менән бүлә.

Перовский ваҡытында ҡаҙна өсөн таш өйҙәр ҙә төҙөлә башлай; Преображенский сиркәүе янында емерелеп төшкәне урынына яңы дворяндар йыйылышы төҙөлә; төп халыҡ училищеһы бинаһы янында оборона казармалары барлыҡҡа килә, ордонанс-гауз, плац-майорға фатир һәм комендант идаралығы, уның эргәһендә комендантҡа ла өй һалына.

Хәҙер беренсеһен һөнәрселек училищеһы биләй, ә һуңғыһында - Ырымбурҙағы бер батальон командирының фатиры.

Шул уҡ ваҡытта генерал-губернаторға ла өй һалына, әммә Перовский унда йәшәмәй; был йортҡа беренсе булып генерал Обручев күсеп килә.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Берлин стратегик һөжүм итеү операцияһында

Вандлитцта һәм тимер юл станцияһында "СС-полицай" батальондары ҡалдыҡтары һәм 300-гә яҡын кешеһе булған фольксштурм отрядтары оборона тота. Улар фауст-патрондар һәм автоматтар менән ҡоралланған булған. 62-се гв. атлы полкы 9-сы танк корпусының бер танк батальоны менән бергә һөжүм башлай. Вандлитц штурм менән алына. Станцияла тимер юл составы ҡулға төшә. Немецтарҙың иҫән ҡалғандары Ораниенбург яғына ҡаса. 22 апрелдә полк ике эскадроны менән Шмахтенхагенға һөжүм итә. Ҡыҫырыҡлап килтерелгән немецтар, Руппинер-канал аша сығып ҡасырға мәжбүр була, эскадрондар был тораҡ пунктын ала. Полктың арттараҡ ҡалған өсөнсө эскадроны картала 50,9 тип аталған бейеклек йүнәлешендә һөжүм йәйелдерә. Эскадрон 76-миллиметрлы һәм 45-миллиметрлы орудиелар менән ҡоралланған ут взводтары, миномет взводы һәм ике ДШК пулеметы взводы ярҙамында, ҡыйыу хәрәкәт итеп, дошманды Руппинер-каналы аръяғына сигенергә мәжбүр итә, һуңынан үҙе лә канал аша сыға. Алыш менән полк штабы начальнигы, гв. подполковнигы А. А. Йосопов етәкселек итә. 3 көн дауамында полк, һуғыша-һуғыша 80 км юл үтеп, 4 тораҡ пунктын ала. Байтаҡ ҡына трофейҙар алына: 10 вагонлы тимер юл составы, 15 автомашина, шулай уҡ дошмандың бик күп хәрби мөлкәте беҙҙең яугирҙар ҡулына эләгә. Немецтарҙың 150 һалдат һәм офицеры юҡ ителә, йә иһә яралана. Полк та юғалтыуҙарға дусар була: 79 кеше (шул иҫәптән 11 офицер) яралана, 25 яугир (3 офицер) батырҙарса һәләк була, 72 ат яралана йә иһә үлә.

22 апрелдә атлы корпус частары Ораниенбург һәм Зандхаузен ҡалалары өсөн көсөргәнешле алыштар алып бара. 16-сы һәм 15-се гв. атлы дивизиялары Ораниенбургҡа һөжүм итә. 62-се гв. атлы полкына, ҡаланы урап үтеп, немецтарҙың тылына сығыу бурысы ҡуйыла. Гв. капитаны Г. Ф. Платоновтың баш эскадроны канал буйлап төньяҡҡа табан ташлана һәм 5 км үтеүгә шартлатылмай ҡалған күпергә юлыға. Әммә бында уларҙы бер рота немец автоматсылары контратакалай. Беҙҙең артиллеристар ҙа алышҡа ҡушыла. Полк батареяһының ут взводы автоматсыларға тура тоҫҡап ут аса. Дошман күп юғалтыуҙарға дусар ителә һәм сигенә башлай. Беҙҙең эскадрон Ораниенбургтың төньяҡ ҡырыйына бәреп керә. Ошо эскадрон артынан полктың төп көстәре лә канал аша сыға. 58-се һәм 60-сы гв. атлы полктары көнсығыштан һөжүм итә. Дошман көслө ҡаршылыҡ күрһәтә, һәр бер урамды һәм өйҙө ныҡышмалы һәм тәүәккәл рәүештә штурмлап ҡына алырға мөмкин була. Немецтар гвардиясыларға ҡаршы авиация ҡулланып та ҡарай, әммә беҙҙең яугирҙар алға таба барыуын дауам итә. Һөжүм туҡтауһыҙ бара. 60-сы гв. атлы полкы артиллерияһы начальнигы, гв. майоры Мөтиғуллин Сафа Ғабдрахман улы командалыҡ иткән артиллеристар орудиеларҙы ҡулдары менән алға тартып килтереп, тура тоҫҡап атыу юлы менән дошмандың ут нөктәләрен юҡ итә. С. Ғ. Мөтиғуллин дивизияла ул формалашҡан ваҡыттан бирле хеҙмәт итә. Ҡайҙа ғына булмаһын, уның орудиелары полктың боевой тәртибендә була һәм дошманды бик мәргән ҡыра. Ул үҙенең шәхси өлгөһө менән яугирҙарына алыштарҙа нисек итеп артиллерия утының ҡеүәтен оҫта итеп ҡулланып була икәнен күрһәтә. Уның ҡыйыулығы һәм оҫта командир булыуы менән полктың барса артиллеристары һәм минометсылары һоҡлана. Ораниенбург өсөн алышта 58-се гв. атлы полкының эскадрон командиры, гв. капитаны Корсун Николай Нестерович та батырҙарса командалыҡ итә. Шулай уҡ гв. подполковниғы И. Ф. Горлатовтың подразделениелары һынатмай, ә командир үҙе контузия ала. 22 апрелдә корпус соединениелары Ораниенбургты и Зандхаузенды дошмандан тулыһынса таҙарта. 16-сы гв. атлы дивизияһы Ораниенбург өсөн барған алыштарҙа 200-ҙән ашыу немец һалдатын һәм офицерын әсиргә төшөрә, байтаҡ ҡына трофейҙар: төрлө йөктәр тейәлгән 4 эшелон, 6 төҙөк самолет, 2 мең төрлө автомашина беҙҙең яугирҙарыбыҙ ҡулына төшә, шулай уҡ яугирҙарыбыҙ 5,5 мең тотҡондо немец концлагерынан азат итә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Элек башҡорттар йәйгеһен итһеҙ ризыҡтарҙы күп етештергән. Мәҫәлән, ундай ризыҡтарға ҡыҫыр ашты, ыумасты, өйрәне, буҙаны, ҡымыҙҙы, тары бутҡаһын, талҡанды, һөт ризыҡтарын индерергә була.*



# МИЛЛИ РИЗЫҠТАРЫҘ,

## таяныр нигеҙебеҙ

**Һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙа, Рәсәйҙә, шулай уҡ донъя кимәлендә башҡорт атына дөйөм иғтибар барлыҡҡа килде. Йыл һайын үткәрелә килгән "Башҡорт аты" фестивале лә шул иғтибарҙың бер иҫбатламаһы булып тора. Башҡорт аты, башҡорт ҡымыҙы, Ирәндек тауы, башҡорт аш-һыуҙары тигән төшөнсәләр телгә алынғанда башҡорт ҡымыҙы брендын барлыҡҡа килтереүсе, сығышы менән Баймаҡ районының Әхмәр ауылы уҙаманы Динис ӨМӨТБАЕВтың исеме лә бер ҡатар яңғырай. Ҡасандыр юҡҡа сыҡҡан Атанғол ауылында Динис үҙенең хужалығын барлыҡҡа килтереп, милли ризыҡтарыбыҙҙы тергеҙеү юлында фиҙаҡәрлек өлгөһө күрһәтә. Уның менән әңгәмәбеҙ башҡорт аты, милли ризыҡтарыбыҙ хаҡында, әммә улар хаҡында ғына ла түгел.**

**Башҡорт ҡымыҙын эсһә, ҡоротон, ҡаҙыһын, ҡартаһын ашаһа, ҡурайында, ҡумыҙында уйнаһа, ҡоролтайҙарын үткәрһә, йәшәйәсәк, тигән лаҡап та йөрөй. Нисек уйлайһың, Динис, беҙ милли ризыҡтарыбыҙҙы етештереп, уларҙы ҡулланып, баҙарҙа һатып, үҙ-үҙебеҙҙе тәьмин итеп йәшәй алабыҙмы?**

- Көн итә алабыҙҙыр, әммә милләт булараҡ һаҡланып ҡалыр өсөн дәүләт яҡлауы кәрәк. Әлбиттә, милли ризыҡтарыбыҙҙы етештереп, музыка ҡоралдарыбыҙҙа уйнап, мәҙәниәт яғынан яҡлаулы була алабыҙ. Әммә юғары үҫеш өсөн иң беренсе нәүбәттә сәнәғәт үҫеше мөһим. Нимәләр етештереп, уны аҡсаға әйләндереп, үҙеңдең көндәлек ихтыяжыңды тәьмин итеп булалыр, әммә милләт үҫеше өсөн был ғына етмәй. Беҙҙе бөгөн, асылда, милли йолаларыбыҙ, традицияларыбыҙ, мәҙәниәтебеҙ, сәнғәтебеҙ, әҙәбиәтебеҙ һаҡлап килә.

Әгәр ҙә беҙҙең милли ризыҡтарыбыҙ, ҡымыҙыбыҙ, ҡоротобоҙ, ҡаҙыбыҙ һ.б. булмаһа, таяныр нигеҙҙәребеҙ бушағараҡ булыр ине. Әгәр ҙә бер милләт икенсе милләттәрҙең ҡиммәттәрен үҙләштереү юлына баҫһа, был хәл ул халыҡтың юҡҡа сыға барыуын аңлата торғандыр. Был йәһәттән беҙ, Аллаһҡа шөкөр, юҡҡа сыға барған халыҡ түгел.

**Был инаныуыңды милли аш-һыуыбыҙға бәйләп нисек аңлата алаһың?**

- Үҫешкән милләттәрҙең аш-һыуҙары ла үҫешә, уларҙың төрҙәре арта. Бәлки, боронғо халыҡтарҙың итенән, ҡамырынан, тоҙонан башҡа бер нәмәһе лә булмағандыр. Ундай халыҡ заманаға яраҡлашып, ни тиклем үҫешә, аң кимәле арта, йәшәү кимәле күтәрелә, ул халыҡтың мәҙәниәтендә лә, сәнғәтендә лә, әҙәбиәтендә лә, милли ризыҡтарында ла нимәләр өҫтәлә. Мәҫәлән, беҙ ит, ҡамыр, тоҙ ярҙамында бөгөнгә тиклем ниндәй генә ризыҡтар уйлап тапманыҡ. Йылдан-йыл башҡорт милли аш-һыуҙарында яңы төрҙәр сығып тора. Беҙ ҙә үҙебеҙҙең хужалыҡта яңы аш-һыу төрҙәре уйлап сығарып торабыҙ. Беҙ бала саҡтан шуны беләбеҙ: элек башҡорттар йәйгеһен итһеҙ ризыҡтарҙы күп етештергән. Мәҫәлән, ундай ризыҡтарға ҡыҫыр ашты, ыумасты, өйрәне, буҙаны, ҡымыҙҙы, тары бутҡаһын, талҡанды, һөт ризыҡтарын индерергә була.

Бына беҙҙең хужалыҡта ғына һуңғы йылдарҙа өс төрлө яңы аш-һыу барлыҡҡа килде. Мәҫәлән, ерек ағасы менән ыҫланып, утта бешерелгән итһеҙ бүрйәни былауы, тағы ла нут борсағы менән ҡорот ҡатыштырып эшләнгән сыр, өсөнсөнән, талҡан менән манный күрпәне ҡатыштырып бер десерт уйлап сығарҙыҡ. Был десерттың исеме - талҡаман. Тағы ла тик үҙебеҙсә генә бешерелгән бәлештәребеҙ бар. "Дөгөтирмә" тигән блюдобыҙ бар. Дөгөнө бешереп, бер һауытҡа һалып ауҙарһаҡ, тирмә формаһында килә лә сыға. Уға укропты ҡурай формаһында ҡаҙап ҡуйһаҡ, бик күркәм күренеш барлыҡҡа килә.

**Беҙҙең милли ризыҡтарыбыҙ, атап әйткәндә, ҡымыҙ, ҡорот, ҡаҙы, ҡарта, бал, тултырма һ.б. башҡа халыҡтарҙа ла бар. Ә бына был ризыҡтарыбыҙҙың тик үҙебеҙгә генә хас үҙенсәлектәре нимәлә?**

- Әгәр ҙә ҡаҙаҡтарҙың аттарын беҙҙең көтөүлектәрҙә йөрөтһән, уларҙан беҙҙекенән бер яғы менән дә айырылмаған ҡымыҙ һәм башҡа ризыҡтар етештереп булыр ине. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең башҡорт тоҡомло аттарҙы уларҙың татырлы далаһында йөрөтөп, ҡымыҙ эшләһән, беҙҙәге һымаҡ эсемлек килеп сыҡмаясаҡ. Сөнки ҡымыҙҙың сифаты бейәнең ниндәй үлән ашауына бәйле. Башҡорт балының да үҙенсәлеге Уралтауҙа үҫкән үләндәр, сәскәләр, йүкә ағастары үҙенсәлегенә туранан-тура бәйле.

Силәбе өлкәһе баҙарҙарында һатыуға ҡуйылған аҙыҡ-түлектең ярлығындағы "башкирское" тигән яҙыу һәр ваҡыт "сифатлы" тигән һүҙгә синоним булып тора. Беҙгә милли ризыҡтарыбыҙҙың ошо феноменын ҡулланырға, күберәк етештереп, күршеләребеҙгә сығарырға ғына кәрәк. Мәҫәлән, беҙ ҡоротто полиэтилен пакеттарға һалып, баҙарға сығарып һатмайынса, башҡасараҡ итеп сервислаһаҡ, бөтөнләй икенсерәк ҡабул ителер ине. Ә ҡороттоң сифаты бындай сервислауға лайыҡлы. Бына Кавказда сыр етештереү мәҙәниәте бик юғары. Был йәһәттән беҙҙең дә потенциал бар, сөнки ҡорот етештереү технологияһы буйынса шул уҡ сырҙарға ҡарай. Беҙ әгәр ҙә ҡоротто "Башҡорт сыры" тип танытһаҡ, һатып алыусыға нимә ашағаны аңлайышлыраҡ булыр ине. Сырҙар ҙа төрлө була, ҡатыһы, йомшағы, ҡорот та сырҙарҙың бер төрө. Ҡоротто киптерһән, ул киптерелгән ҡоро сыр тип аталыр ине. Беҙгә стандарттарҙы өйрәнеп, ҡоротто һатыуға дөрөҫ итеп тәҡдим итеү юлдарын табырға кәрәк.

**Беҙ үҙебеҙҙе "эшләй беләбеҙ, эшләгәндә тәҡдим итә, һата белмәйбеҙ", тип әйтә алабыҙмы?**

- Тап шулай. Ҡайһы бер халыҡтар юҡ ҡына әйберҙәрен, аш-һыуҙарын әллә ниндәй рәүешкә килтереп, әүеш-тәүеш итеп, донъя баҙарына сығаралар һәм аҡса эшләйҙәр. Был мәсьәләгә беҙҙең ҡараш башҡа, ул насар түгел, әммә матди яҡтан файҙа килтермәй торған ҡараш. Мәҫәлән, беҙ йылҡы малын күп итеп көтәбеҙ, әммә бөтә илгә билдәле булған продуктыбыҙ, тауарыбыҙ юҡ. Ә беҙҙең йылҡы малын Татарстанға, Сыуашстанға алып китеп, уны төрлөсә эшкәртеп, баҙарға сығаралар. Уларҙың йылҡы итенән эшләнгән ризыҡ тәҡдимдәре үҙебеҙҙекенә ҡарағанда күпкә күберәк. Был йәһәттән беҙҙең елкә бар ҙа ул, булдыҡлылыҡ етешмәй. Беҙгә тағы ла даимилыҡ кәрәк, быға ирекле булыуыбыҙ ҙа ҡамасаулай торғандыр.

**Һин "Урал батыр" эпосын ныҡлап өйрәнгәндән һуң ит ризыҡтарын ашауҙан туҡтағанһың. Беҙҙең ата-олатайҙар элек-электән ит менән туҡланған, ул беҙҙең ҡанда. Ҡанда булғанды аң менән инҡар итеп буламы икән?**

- Тәүҙә үҙемдең организмды өйрәнеү маҡсатында ҡыҫҡа ваҡыттарға ит ашауҙы туҡтатып торғайным. Һуңынан ашҡаҙанда проблемалар барлыҡҡа килгәс, уны таҙартыу зарурлығы хаҡында ишетеп ҡалдым. 2011 йылда яҙ көнөндә бер ай ит ашамағас, үҙемдә үҙгәрештәр һиҙҙем. Аҙаҡ ит ашамау ваҡытын оҙайта барҙым. Шунан 2014 йылда ярты йылға тиклем ит ашамай йөрөнөм.

2015 йылда инде "Урал батыр" эпосын уҡыным. Эпоста Урал батырҙың бер урында ла ит ашауы хаҡында мәғлүмәт тапманым. Эпостың 590-сы юлында Урал батыр бер ҡартты осрата. Ҡарт уға донъяла ике урындың барлығы хаҡында әйтә. Урал батыр тере заттарҙың йәнен ҡыйырға ярамай тигән фәлсәфә менән йәшәй башлай. Шуға күрә эпоста уның ит ейеүе хаҡында бер урында ла әйтелмәй. Ейеү тик иткә ҡарай ғына әйтелә, башҡа ризыҡтарҙы әҙәм ашай. Ейеү һүҙе беҙҙә һаҡланмаған, ә бына ҡаҙаҡтарҙа һаҡланған.

Шуға күрә ит ашамауҙың ыңғай яҡтары бар икәнлеген күреп, үҙемә ит еймәҫкә нигеҙ таптым. Миңә ит ашауҙан баш тартыу бик еңел булды. Мин ит ашаусылар тегеләй, тигән өгөт-нәсихәт алып бармайым, шулай ҙа ит ашамайынса мин үҙемде күпкә яҡшыраҡ хис итәм. Беҙҙең ата-бабалар борон-борондан ит ашаған, һин ниңә ашамайһың, тиеүселәргә лә әйтер һүҙем бар. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙ был хаҡта белмәйбеҙ. Йөҙ, өс йөҙ йыл элек нимәләр булғанын, бәлки, әҙ-мәҙ генә әйтә алабыҙҙыр, әммә мең, биш мең йыл элек нисек булғанлығы хаҡында әйтә алмайбыҙ. Уларҙың нимә ашап, нимә эсеп йөрөгәнлеген бер нисек тә белә алмайбыҙ. Минең биш быуын элекке ҡартатайҙарым ит ашаған өсөн мин дә ит ашарға бурыслымы икән? Мәҫәлән, кемдеңдер атаһы араҡы эсеп, тәмәке тартып йәшәгән өсөн уның ейәндәре лә араҡы эсеп, тәмәке тартып йәшәргә бурыслымы? Ысынында, беҙҙең ата-бабалар араҡы эсмәгән, тәмәке тартмаған, ә беҙ ниңә шуны бөгөн йәшәү нормаһы тип әйтергә тейешбеҙ һуң? Шул уҡ ваҡытта беҙҙең ата-бабалар ит ашаған икән, нисек беҙ бөгөн ит ашамауҙы норма түгел тип әйтә алмайбыҙ?

**Иттең составында булған организмға кәрәкле матдәләр ҙә бар. Уларҙы нимә менән алмаштыраһың?**

- Иң беренсе нәүбәттә иттә организм өсөн кәрәкле булған аҡһым бар. Мәҫәлән, борсаҡтың 100 грамында 20 грамм аҡһым булһа, ә 100 грамм һарыҡ итендә 16 грамм ғына аҡһым. Мин ике йылға бер тапҡыр анализдар биреп, һаулығымды тикшертеп торам. Әлбиттә, ит ашамауҙың быуындарға, елек майына ҡағылышлы йоғонтолары булыуы ихтимал, һәр хәлдә, был хаҡта ишеткәнем бар. Әммә ит ашауҙың кире йоғонтолары ла бар һәм ул турала берәү ҙә өндәшмәй. Был йәһәттән балансты табырға кәрәк, минеңсә.

**Һуңғы ваҡытта ҡайһы бер халыҡтар беҙҙең башҡорт атына, ҡурайыбыҙға "ҡул һона" башланы. Был әңгәмәлә беҙ ошо темаға бер нисек тә урап үтә алмайбыҙ. Шулай бит?**

- Был мәсьәләгә бер яҡтан ғына ҡараһаң, нисектер, бер ҡатлыраҡ булаһың. Милләткә үҫешер өсөн төрлө өлкәләрҙә нимәләр булдырырға кәрәк. Мәҫәлән, борондан һаҡланып килгән башҡорт атын тоҡом итеп һаҡлар, үрсетер өсөн бигерәк тә совет осоронда тиҫтәләрсә йылдар буйы фәнни нигеҙҙә эш алып барылған беҙҙә. Беҙҙең күршеләр ошо башҡорт тоҡомло аттарҙы һатып алып үҙләштереү юлына баҫты. Әммә ул тоҡом аттары, асылда, башҡорт тоҡомло аттар һәм был хаҡта улар беҙгә ҡарағанда ла яҡшыраҡ белә. Улар башҡорттоң үҙен дә "Урал татары" тип һанаған, атын да үҙенең аты тип һанай. Беҙҙең "Аҡъял" тигән башҡорт тоҡомло айғырҙы улар йәһәт кенә "Аҡбарс"ҡа әйләндерҙе. Ҡурай менән дә шундай уҡ хәл. Иң тәүҙә алты уйымлы һыбыҙғыны ҡурай тип йөрөтә башланылар ҙа, аҙаҡ беҙҙең ҡурайҙы үҙҙәренеке тип атамаҡсылар. Бәлки ҡурайҙың даны тынғылыҡ бирмәйҙер уларға. Мин бындай күренештәргә ҡаршы көрәшеүҙең мәғәнәһен күрмәйем. Сөнки был күренеш бындай юлға барыусыларҙың дөйөм мәҙәни кимәле хаҡында һөйләй. Беҙ, мәҫәлән, гитарала, скрипкала уйнайбыҙ, әммә уларҙы башҡорттоҡо тип әйтмәйбеҙ бит.

**Башҡорт атының ниндәй сифаттары һиңә оҡшай, нимәһе өсөн яратаһың? Миңә, мәҫәлән, уларҙың талымһыҙлығы оҡшай. Бер мәртәбә оҙон тороҡло башҡа тоҡомло аттар менән башҡорт аттарын сабыштырып ҡарағандар. Ҡыҫҡа араға сабышҡанда оҙон тороҡло сабыш аттары башҡорт атын күпкә артта ҡалдырған. Әммә оҙон дистанцияға сабышҡанда, тәүҙә башҡа аттар башҡорт атын күпкә артта ҡалдыра, аҙаҡ улар арыған ваҡытта саҡ ҡыҙып алған башҡорт аты уларҙы ҡыуып етә һәм финишҡа алдан килә.**

- Беҙгә ат менән йылҡыны айырырға кәрәк. Сөнки беҙ ат итеп тәрбиәләгән мал тибендә йөрөмәй. Әгәр ҙә беҙ атты тибендә йөрөтһәк, ул йонсоясаҡ. Тибендә ҡыш сыҡҡансы, йылҡы үҙенең 30 процент массаһын юғалта. Ә ябыҡҡан малды бер нисек тә бәйгегә сығарып булмаясаҡ. Шул уҡ ваҡытта оҙон тороҡло башҡа тоҡом аттары тибендә ҡыш сыға алмаясаҡ. Уларҙың хатта йөнө лә ҡуйы булып үҫмәй, ә башҡорт атының йөнө 6-7 сантиметрға барып етә. Башҡорт атының һаулығы ла ныҡ була, сыҙамлылығы, ҡатмарлы шарттарға яраҡлашыуы ла тибендән килә.

Ә аттарға килгәндә, минең тәжрибәм етмәй. Сөнки мин үҙемдә тәрбиәләнгән аттарҙы башҡа тоҡомло аттар менән сабыштырып ҡарағаным юҡ. Әгәр ҙә үҙемдең менгә атым 40 саҡрым араны йүгереп үтеп, эргәһендә килгән башҡа тоҡомло ат артта тороп ҡалһа, был осраҡта сағыштыра алыр инем. Ҡаҙаҡтар, мәҫәлән, 500 саҡрымлыҡ араны ат менән үтеп ярыш үткәрҙеләр. Унда ҡабарҙылар, ҡарасәйҙәр барҙы. Барыһының араһынан ҡабарҙылар финишҡа килеп еттеләр. Был ярышта башҡорт аты ҡатнашманы. Унда ҡатнашыр өсөн 500 саҡрым үтә алырлыҡ кимендә ун ат тәрбиәләргә кәрәк беҙгә. Ярыштың шарттары буйынса аттар төнгөләккә туҡтап, ял итергә, йоҡларға, ашарға тейештәр. Һыбайҙарҙы аттарға һоло, башҡа ризыҡ тейәлгән машиналар оҙата бара. Унда ултырып, ветеринарҙар ҙа аттарҙың һаулығын тикшерә-тикшерә барырға

***✓ Йылҡы - ул мал, уны менмәйҙәр, екмәйҙәр, тибендә тик йөрөй. Мәле етһә, күрәйһә, уны һуйып ашайҙар. Ә ат булһын өсөн йылҡы араһынан үҙеңә оҡшағанын һайлап алаһың да, тәрбиәләй башлайһың.***



# ҠУРАЙҺЫҘ, АТҺЫҘ...

## бушағыраҡ булыр ине

тейеш. Күп кенә аттар дистанциянан төшөп ҡала.

Башҡорт атының сифаттарына килгәндә, улар хәллерәк. Беҙҙә сит тоҡомдан бер юртаҡ ат булды. Әгәр ҙә ул бер көн йөрөһә, икенсе көн йөрөй алманы. Уның менән бер мәртәбә Ирәндеккә менеп төшкәндән һуң ике көн ял итергә кәрәк була. Ә беҙҙең башҡорт аты көн һайын Ирәндеккә менеп төшә ала. Шул уҡ ваҡытта 50 саҡрым араны беҙҙең аттар сәғәт ярымда еңел генә үтә. Туризм маршруты буйынса йөрөгәндә беҙҙең аттарҙы менеп йөрөүселәр иң тәүҙә уларҙың таһыллы булыуын билдәләй.

Хужалығыбыҙ ныҡлап аяҡҡа баҫҡандан һуң башҡорт атын һаҡлау, үрсетеү, үҫтереү буйынса эҙләнеү эштәрен башларға ниәт итәбеҙ. Был йүнәлештә төрлө һынауҙар, саралар үткәреүҙе күҙ уңында тотабыҙ. Киләһе йылда, Аллаһ бойорһа, башҡорт аты тураһында тулы метрлы кино төшөрә башлаясаҡбыҙ. Темаһы - ир һәм ат, сценарий авторы Шәүрә Шәкүрова. Был киноны төшөрөү өсөн грант оттоҡ.

**▸ Мин "Турысай һабағы" тигән хикәйә яҙғайның. Унда башҡорт тоҡомло туры айғырҙың үҙ өйөрөнөң сафлығы өсөн көрәшеүен һүрәтләнем. Айғырҙың ул сифаттары билдәле: үҙ "ҡыҙының" айғырға ятыр мәле етһә, өйөрөнән ҡыуып сығарыуы, өйөрөндәге берәр бейә икенсе айғырға ятып, ҡолонлаһа, ҡолондо еҫкәп, үҙенеке түгеллеген танып, талауы, шулай уҡ өйөрҙән ҡыуыуы һ.б. Башҡорт атын өйрәнеүгә бар ғүмерен бағышлаған ғалимә Ираида Әхәтова фекеренсә, башҡорт тоҡомло айғырҙың был сифаты тибенлек шарттарында формалашҡан. Был йәһәттән һинең фекерҙәрең нисек?**

- Миненсә, башҡа тоҡомло айғырҙар ҙа тибен шарттарында йәшәһә, шундай уҡ сифаттарға эйә буласаҡ. Мәҫәлән, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ тоҡомло айғырҙар ҙа үҙенең "ҡыҙына" ынтылмай. Был шулай уҡ айғырҙың йүнле һәм йүнһеҙ булыуына ла бәйле. Йылҡысылыҡ заводтары аттарына килгәндә, ниндәй бейәне ниндәй айғырға яткырыуҙы ундағы хеҙмәткәрҙәр билдәләй. Тәбиғәттең иһә үҙ ҡанундары. Башҡорт тоҡомло айғыр үҙенең "ҡыҙҙарын" генә түгел, "малайҙарын да" ҡыуып сығарасаҡ, малайҙары "әсәләренә", "апаларына" һәм "һеңлеләренә" ынтылмаһын өсөн. Шуға күрә элек тәбиғәттә берәҙәк айғырҙар күп булған. Улар башҡа өйөрҙәрҙән айғыр ҡыуып сығарған бейәләрҙе үҙенең янына туплап, өйөр барлыҡҡа килтергән. Йәғни тәбиғәттә барлыҡ процестар ҙа тәбиғи рәүештә барған.

**▸ Шулай ҙа йылҡы менән ат нимәһе менән айырыла?**

- Йылҡы - ул мал, уны менмәйҙәр, екмәйҙәр, тибендә тик йөрөй. Мәле етһә, күрәйһә, уны һуйып ашайҙар. Ә ат булһын өсөн йылҡы араһынан үҙеңә оҡшағанын һайлап алаһың да, тәрбиәләй башлайһың. Эйәр һалаһың, менгегә, еккегә өйрәтәһең, уның менән мөнәсәбәт булдыраһың. Йылҡы һине танымай, яҡынлаһаң, ҡаса, ә ат таный, кешегә ышана, саҡырһаң, килә, ул кеше ҡулына өйрәнә. Кеше уны ҡулға өйрәтһә, был ат өсөн яуаплы була башлай.

**▸ Тайы ат булғансы, эйәһе эт булған, тигән мәҡәл бар. Ул нимәне аңлата тип уйлайһың?**

- Ат шул тиклем аҡыллы хайуан, уны егергә, менергә өйрәтеү менән генә эш бөтмәй. Атты тауыш, күҙ ҡарашы менән аңларлыҡ итеп өйрәтеп була. Ат бер һыҙғырыуың булһын, эргәңә килеп торорға тейеш. Яу аттары беҙ көн дә менеп йә егеп йөрөгән аттар түгел. Улар күкрәге менән дошманды һуғырға, тояғы менән сапсырға, йырындарҙы, соҡорҙарҙы һикереп үтергә өйрәтелә. Бына шул ысын ат була, уны ошо хәлгә еткергәнсе эйәһе ҙур көс түгә, шуға ла "эт була" инде. Кисеүҙе лә сығырға ҡурҡып торған атты мин атҡа һанамайым, ул - өйрәтелеп бөтмәгән мал. Ысынлап та, йылҡы малын ат дәрәжәһенә еткергәнсе самаһыҙ күп ваҡыт һәм көс талап ителә.

**▸ Мин унынсыны тамамлағас, тыуған "Ленин" исемендәге колхозда чабан булып эшләнем. Бер ҡола атты Насибулла тигән ағай менән егергә өйрәтәбеҙ. Нисек кенә маташһаҡ та, тәртә араһына төшөрә алмайбыҙ. Ул санабыҙҙың баш ҡарамаһын емерә тибеп бөттө. Шул саҡ Ғәлиастан тигән олатай беҙҙең ыҙаланғанды ҡарап торҙо ла, килеп, атты теҙгененән тотоп, ҡолағына нимәләр тип өндәште. Атыбыҙ артҡа сигеп китеп, бейей-бейей үҙе тәртә араһына инеп баҫты. Аттың теле буламы икән, был хаҡта нимә әйтерһең?**

- Ундай кешеләрҙе "атты арбай белгән кеше" тип атайҙар. Үҙем әлегә ат арбай белмәйем, сөнки ул серҙәргә төшөндөрөүсе юҡ. Ат кешенең ҡарашын таный. Мәҫәлән, аттарҙы уҡырға, һанарға өйрәтеүселәр бар. Һәр хәлдә, шундай кешеләр менән аралашҡаным булды. Ат, кешенән айырмалы рәүештә, бөтөнләй икенсе төрлө күрә. Ул үҙенең күҙҙәре алдындағы әсмөйөштө, ҡолағы артындағы әсмөйөштө күрмәй. Ул 320 градустағы арауыҡты күрергә һәләтле. Әйтәйек, һин аттың ҡаршыһына баҫып, уға ҡарайһың, ә ул ҡарашыңдың ҡайһы ергә төбәлгәнен күреп тора. Атты арбау уның ҡарашына бәйле, шуға был серҙәргә төшөнөп булалыр, быға өйрәнергә кәрәк. Ғәлиастан олатай һүҙҙәре менән генә түгел, ҡарашы, ымдары менән атты тәртә араһына төшөрә алғандыр, тием.

**▸ Яҙыусы, йыраусы Спартак ағай Ильясов менән дуҫ булдыҡ. Ул ат һайлауҙың боронғо бер ысулы хаҡында һөйләгәйне. Элек кеше һайлаған атының күҙҙәренә ҡараған һәм унда көҙгөләгә кеүек үҙен күрә алһа, шул атҡа йүгән кейҙергән.**

- Минең уйымса, һәр бер аттың күҙендә үҙеңде күреп булалыр ул. Башҡорт халыҡ әкиәттәрендә лә бар бит. Йүгәнеңде һелкеп сыңғырлатҡанда ҡайһы ат башын бороп ҡарай, шул ат һинеке, тип яҙылған уларҙа.

Әле өйөрөм араһында ун биш ҡолон бар. Шуларҙың араһынан дүртеһен үҙемә һайлап алып ҡалырға уйлайым. Ҡалғандарын һатам. Һайлап алынғандарҙы йәш ярымға еткәндә ат итеп өйрәтә башлайым. Маҡсатыма килгәндә, минең хужалыҡта 30-40 ат булырға тейеш. Әле улар ҡар ҡалынайғансы барыһы ла тибендә йөрөй. Йонсой башлағанда ғына уларға бесән ашата башлайбыҙ. Ҡар иреп, ҡара ер күренә башлауға тағы ла сығарып ебәрәбеҙ. Ғәҙәттә, улар ҡурала өс ай, ғинуар, февраль, март айҙарында тора.

**▸ Тағы ла бер мәҡәл бар: атыңа ла, ҡатыныңа ла ышанма, эргәңдә ятҡан этеңә ышан, тигән. Ниңә шулай әйткәндәрҙер инде? Ишеткәнең бармы?**

- Ишеткәнем бар. Аттарҙың да төрлөһө була. Улар алып ҡасырға, һыбайлыны күтәреп һуғырға, үҙҙәре ҡасып китергә мөмкиндәр. Ҡыйтыҡ аттарҙың тибеп ебәреүе бар. Ҡартатайым ат көткән. Сибайҙа йәшәгән, аты менән Әхмәр ауылына ҡайтып йөрөгән. Бер мәл ауылға ҡайтып килһәләр, аттары нимәнәндер ҡурҡыпмы, өркөпмө, күгәүен тешләпме, алып ҡасҡан. Арбаларының тәгәрмәсе күсәренән ысҡынып, арбалары әйләнеп, Мәҙинә апай ат арбаһының аҫтында ятып ҡалған. Ҡартатай менән ҡартәсәй ҙә арбанан ҡолағандар. Бәлки, шундай осраҡтарҙан һуң ат тураһында шундай һүҙҙәрҙе әйткәндәрҙер. Ә эттәргә килгәндә, ошоғаса хужаһын тешләгән эт тураһында ишеткәнем юҡ.

**▸ Беҙҙең республика Рәсәйҙә йылҡы һаны буйынса тәүге урындарҙа. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ни өсөн беҙҙең Өфөлә, мәҫәлән, "Кымыҙ", "Ҡаҙы" тигән магазиндар юҡ? Ниңә "Ҡорот" тигән магазин юҡ? Ниңә беҙ үҙебеҙҙең ошондай ҡиммәттәребеҙҙе бренд кимәленә күтәрә алмайбыҙ?**

- Был ризыҡтарыбыҙға беҙҙең күҙ өйрәнгән, беҙ уларҙы көндәлек ризыҡ тип ҡабул итәбеҙ, танһыҡ түгел. Уларҙан бренд яһар өсөн булдыҡлылыҡ һәм икенсе төрлө ҡараш кәрәк. Ризыҡтарыбыҙ башҡалар өсөн затлы булып күренергә тейеш. Һуғым һуйғанда беҙҙең халыҡ ҡаҙылыһын да, тултырмаһын да әҙерләп һалып ҡуя ла, ҡыш буйы рәхәтләнеп ашай. Әммә баҙарға сығарыу тураһында уйлап еткермәйбеҙ. Икенсенән, бар кеше лә эшҡыуар була алмай. Ул йөҙҙән береүгә, мендән береүгә хас булған һәләт. Кемгәләр ялланып эшләп, ҡалған ваҡытын үҙенә, ғаиләһенә бүлеү уңайлыраҡтыр. Ә эшҡыуар кеше көнө-төнө, тәүлегенә 24 сәғәт шул эше менән йәшәй. Бөгөн дәүләт эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүселәргә төрлө гранттар бүлә, мин дә алғаным булды. Кеше әгәр ҙә биш йыллыҡ эш планы төҙөп, үҙ эшен башлай икән, ниндәйҙер һөҙөмтәләргә өлгәшә ала. Әгәр ҙә мин үҙем ит ашаған кеше булһам, ошо көнгә ниндәйҙер иткә бәйле брендты булдырыр инем.

**(Дауамы 10-сы биттә).**



*Башҡорт атының сифаттарына килгәндә, улар хәллерәк. Беҙҙә сит тоҡомдан бер юртаҡ ат булды. Әгәр ҙә ул бер көн йөрөһә, икенсе көн йөрөй алманы. Уның менән бер мәртәбә Ирәндеккә менеп төшкәндән һуң ике көн ял итергә кәрәк була. Ә беҙҙең башҡорт аты көн һайын Ирәндеккә менеп төшә ала. Шул уҡ ваҡытта 50 саҡрым араны беҙҙең аттар сәғәт ярымда еңел генә үтә. Туризм маршруты буйынса йөрөгәндә беҙҙең аттарҙы менеп йөрөүселәр иң тәүҙә уларҙың таһыллы булыуын билдәләй.*

✓ *Ошо ҡиммәттәребеҙ беҙҙе милләт итеп һаҡлай икән, үҙебеҙ ҙә уларҙы һаҡларға, үҫтерергә бурыслыбыҙ. Бындай ҡиммәттәре булмаған милләттәр күберәк сәйәсәт менән шөғөлләнеп, үҙҙәрен һаҡларға тырыша.*



# МИЛЛИ РИЗЫҠТАРҺЫҘ, ҠУРАЙҺЫҘ, АТҺЫҘ...

## таяныр нигеҙебеҙ бушағыраҡ булыр ине

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**Бына һин ҡымыҙ етештереү буйынса байтаҡ ҡына уңыштарға өлгәшкәнһең. Һинең уңышыңдың серҙәре нимәлә, беҙгә лә аса алаһыңмы?**

- Мин үҙемде ҡымыҙ етештереү мәҙәниәтенә ҙур үҙгәреш индерҙем тип әйтә алам. Уны бөтөнләй икенсе форматта баҙарға тәҡдим иттем. Элек натураль ҡымыҙ баҙарҙа, юлда литр ярымлыҡ ҡуптырлаҡтарҙа һатылған булһа, бындай алым бер нисек тә беҙҙең мәҙәниәтте үҫтермәй. Юлда һатылған ризыҡ юлда һатылған ризыҡ булып ҡала, мәҙәниәтте сағылдырмай, гастрономик мәҙәниәт элементы ла була алмай. Шуға күрәлерме, һикһәненсе-туҡһанынсы йылдарҙа ҡымыҙға ҡарата кире ҡараш та күҙәтелде. Ул саҡта ауыл кешеләренән ҡалала йәшәүселәр "колхозник", "кумысная морда" тип көлгәнен дә ишетә торғайныҡ. Ә бөгөн ҡымыҙ затлы эсемлеккә әйләнеп бара. Затлы эсемлек иһә бер нисек тә пластик һауытта була алмай. Мин француз үҙенең затлы шарабын пластик һауытта тәҡдим итеүен бер нисек тә күҙ алдына килтерә алмайым.

Ә беҙҙең милли эсемлегебеҙ - ҡымыҙ. Ҡымыҙ беҙҙең эсемлектәребеҙ араһынан иң юғары дәрәжәлә булырға тейеш. Сөнки беҙ донъяға яралғандан алып ат менән йәнәшә йәшәйбеҙ. Шул фәлсәфә аша ҡымыҙҙы бөтөнләй икенсе форматта тәҡдим итергә тейешлегебеҙҙе аңланым. Беренсенән, ул юғары сифатлы булырға тейеш һәм арзан булырға тейеш түгел. Ҡымыҙ иҫкермәй, боҙолмай торған шарттарҙа, стандартҡа тап килгән быяла һауытта һаҡланырға тейеш. Ошо шарттарҙы үтәгәндә беҙ ҡымыҙыбыҙҙы юғары дәрәжәгә күтәрә алабыҙ. Беҙ үҙебеҙҙең хужалыҡта миҙгелдә 12 тоннанан ашыу ҡымыҙ етештерәбеҙ. Өлгөртә алмайбыҙ, килеп алып китеп торалар. Ҡымыҙҙы өс төрлө итеп эшләйбеҙ. Тәүгеһе - классик, икенсеһе - ыҫланған, өсөнсөһөн ҡыр сейәһенең япрағын һалып эшләйбеҙ. Шешәләрҙең этикеткалары ла рәссамдар тарафынан төшөрөлгән. Ҡайҙа, ҡасан, кем етештереүе лә яҙылған. Һатып алыусы беҙҙең ҡымыҙ шешәһен ҡулына алыу менән мәҙәниәтебеҙ менән таныша башлай. Район, ауыл, ҡымыҙ оҫтаһының исемдәре, унда матур тәбиғәт күренеше, аттар төшөрөлгән. Пластик һауыттағы ҡымыҙҙа бер ниндәй ҙә мәҙәниәт юҡ. Уға һатып алыусы бер генә төрлө баһа бирә - тәмле булһа, еткән.

**Һуңғы йылдарҙа колхоз-совхоздар бөтөү сәбәпле ерҙәр һөрөлмәй, сәселмәй һәм күп кенә ауылдарҙа сабынлыҡтарҙың йылҡы тарафынан тапалыуына зарланалар. Шул уҡ ваҡытта оло юлдарға аттарҙың сығып тапалыуы оло бәләгә әүерелде.**

> ***Ә беҙҙең милли эсемлегебеҙ - ҡымыҙ. Ҡымыҙ беҙҙең эсемлектәребеҙ араһынан иң юғары дәрәжәлә булырға тейеш. Сөнки беҙ донъяға яралғандан алып ат менән йәнәшә йәшәйбеҙ. Шул фәлсәфә аша ҡымыҙҙы бөтөнләй икенсе форматта тәҡдим итергә тейешлегебеҙҙе аңланым. Беренсенән, ул юғары сифатлы булырға тейеш һәм арзан булырға тейеш түгел. Ҡымыҙ иҫкермәй, боҙолмай торған шарттарҙа, стандартҡа тап килгән быяла һауытта һаҡланырға тейеш.***

**Шул проблемалар тураһында нисек уйлайһың?**

- Сабынлыҡтар тапалауы, юлдарға аттар сығып яһалған авариялар, кешеләр һәләк булыуы ҙур проблемаға әүерелде. Юлда йөрөүсе водителдәр күп йәһәттән алдан киҫәтелмәүҙән аттар менән бәрелешә. Әгәр ҙә киҫәтеүсе яҙыуҙар күберәк ҡуйылһа, водителдәр иғтибарлыраҡ булыр ине. Икенсенән, аттар, ғәҙәттә, оло юлдың бер урынында күберәк йөрөйҙәр. Шуға күрә шул ерҙәргә бағаналар ултыртып, ҡояш энергияһы ярҙамында панелдәр ҡуйып юлдарҙы яҡтыртҡанда, авариялар күпкә кәмер ине. Унда, бәлки, 100-200 метр арауыҡты яҡтыртырға кәрәк булыр.

Иң ҙур яуаплылыҡ, әлбиттә, йылҡы тотҡан кешеләрҙең үҙҙәрендә булырға тейеш. Өйөрҙөң көтөүсеһе булыуы мотлаҡ. Йылҡы малы юл ситенә тоҙ яларға сыға. Әгәр ҙә йылҡы хужалары малдарының тоҙ ялау ихтыяжын ҡәнәғәтләндерһә, йылҡы юлға ла сығып йөрөмәҫ ине. Тағы ла төндә машиналарҙың фар яҡтыһын ҡайтара торған таҫмалар була, шуларҙы аттарҙың муйынына таҡырға була. Әгәр ҙә таҫмаларҙы һәр бейәгә тағып сығарһаң, әллә ҡайҙан күренеп торасаҡтар. Беҙҙең Ирәндек зонаһында юлдар булмағас, ул йәһәттән беҙҙә тыныс. Машина йөрөрлөк юлдар булмағас, ул проблема ла юҡ. Был мәсьәләлә яуаплылыҡ ике яҡлы булырға тейеш: дәүләт һәм хужалар яғынан.

Сабынлыҡты тапауға килгәндә, минең сабынлыҡты тапаһалар, мин дә көйөр инем. Был проблеманы хәл итеүҙең юлы сабынлыҡты кәртәләп алыуҙалыр. Әгәр ҙә сабынлыҡ кәртәләнһә, унда бесән дә яҡшыраҡ үҫәсәк, йыйып алынған бесән менән хаҡы ла сығасаҡ.

**Сит өлкәләр менән сиктәш ауылдарҙа аттарҙың күпләп урланыуы бер кемгә лә сер түгел. Был проблема һеҙгә ҡағылғаны булдымы?**

- Беҙҙең хужалыҡта бындай хәл осраманы, күрше-тирәлә булғаны бар. Малды еңел генә урлап булмай, шуға күрә ситтәр малды үҙҙәре генә урламай. Был яҡтан ярҙам итеүселәр күп. Йыш осраҡта ҡарауһыҙ малды алып китәләр. Ундай малды ҡыуып алып китһәләр, эҙләп ҡарамағас, аҙна-ун көн, ай үтмәйенсә, алып киткәндәрен дә белмәүҙәре бар. Ә малын көн һайын ҡараған кешенекен урлауы еңел түгел. Юҡҡа ғына "Иҫәпленең малы теүәл" тимәйҙәр. Ҡарауһыҙ йөрөгән мал тураһында, ғәҙәттә, шул яуапһыҙ хужаның ауылдаштары белә һәм ошо мәғлүмәтте бурҙарға еткерә. Мәҫәлән, ҡаҙаҡтарҙың беҙгә килеп, үҙҙәре урларлыҡ мал табып алып китеүҙәре тураһында ишеткәнем юҡ.

**Һин ҡымыҙҙың брендын эшләгән һымаҡ, ҡаҙаҡтар ҡоротоҡон эшләгәндәр тиҙәр. Улар ниндәй ысул менән быға өлгәшкән икән?**

- Эшләү ысулы беҙҙекеһымаҡ уҡ. Әммә үләндәре башҡаса булғас, тәмдәре айырыла инде. Бәлки, тоҙ һалаларҙыр, ҡороттары әсерәк килеп сыға. Монголдарҙың, ҡырғыҙҙарҙың, ҡаҙаҡтарҙың ҡоротон ашап ҡарағаным бар, уларҙыҡына нимәлер ҡушылған һымаҡ. Беҙҙең ҡорот киппә, һарғая, уларҙыҡы ағара.

**Бынан бер нисә йыл элек милли аш-һыуҙарыбыҙҙы етештереүселәр менән осрашып һөйләшкәйнем. Улар Мәскәү рестрандары беҙҙең милли аш-һыуҙан өс ризығыбыҙҙы һатып ала тигәйнеләр. Улар: ҡыҙыл эремсек, ғөбәҙиә һәм йылҡының ялы. Нисек уйлайһың, тағы ла ниндәй ризыҡтарыбыҙҙы Рәсәй һәм сит ил ҡулланыусыларына сығара алыр инек?**

- Әгәр ҙә Мәскәү ҡыҙыл эремсегебеҙҙе ала икән, тимәк, күберәк ҡыҙыл эремсек эшләргә кәрәк. Әммә рус телле һатып алыусыға "ҡыҙыл эремсек" һүҙе аңлашылып бөтмәгән һымаҡ. Уны красный творог тип атарғамы? Әммә был һүҙ менән дә был ризыҡтың үҙенсәлеге аңдарына барып етмәй. Ҡыҙыл эремсек һөттө оҙаҡ итеп ҡайнатыуҙан хасил була. Әгәр ҙә уны "карамельный творог" тип атаһаң, ҡыҙыҡһыныу барлыҡҡа киләсәк. Сөнки күптәргә карамель һүҙе тәмле, шәрбәтле ризыҡ булып аңына һеңгән. Мәҫәлән, мин ҡыҙыл эремсекте ашағанда рецепторҙарым карамель итеп ҡабул итә. Сөнки ысынында шулай. Ҡыҙыл эремсекте карамельный творог тип баҙарға сығарһаҡ, ул еңелерәк ҡабул ителер ине.

Ҡороттарға килгәндә, уларҙы муйыллы ҡорот, сейәле ҡорот тигән һымаҡ десерт итеп әҙерләргә кәрәктер. Сөнки беҙҙең ауылда йәшәүселәрҙең ҡорото ла, ҡыҙыл эремсеге лә бар һәм улар баҙарға барып, уларҙы һатып алып йөрөмәйәсәк. Мәҫәлән, минең ҡымыҙҙы күргән ауылдаштарым шулай тип әйтеүе бар: "Нишләп һинең 750 грамм ҡымыҙың 300 һум тора, ана, теге кешенеке литр ярымы 250 һум ғына..." - тип улар үҙҙәренең ризаһыҙлығын мотлаҡ белдерәсәк. Сөнки башҡортҡа был ризыҡтар өйрәнелгән, ҡәҙимге аҙыҡтар. Ҡоротто күп осраҡта күстәнәс тә итеп бирәләр һәм уның ауылда хаҡы бөтөнләй юҡ. Баҙарҙа ҡаймаҡ һатып алһаң, ҡоротто ҡушып бирәләр. Ә бит был затлы ризығыбыҙ улай осһоҙ йә бөтөнләй хаҡһыҙ булырға тейеш түгел. Беҙгә ҡоротҡа, эремсеккә баҙарҙа ихтыяж күтәрергә кәрәк.

**Шундай затлы ризыҡтарыбыҙға еңелсә мөнәсәбәт ҡайҙан килә тип уйлайһың?**

- Беҙҙең халыҡ өсөн аҡсаның еңел һәм тиҙ килеүе мөһим. Добротворскийҙың, Сабанеевтың, башҡа авторҙарҙың китаптарын уҡығаным бар. Ҡышҡыһын башҡорттарға килеп, арзан хаҡҡа бер йылға ерен ҡуртымға алып, аҡсаһын шундуҡ түләйҙәр. Ә йәйҙе көтөп, ҡыйбатыраҡ хаҡҡа бирер өсөн алыҫтағы перспектива уның өсөн ҡыҙыҡ түгел. Аҙаҡ йыл буйына еренде башҡа кеше эшкәртеп, мул табыш алғанда тешенде ҡыҫып түҙәһең инде. Тимәк, аҡсаны ошолай еңел һәм тиҙ генә эшләү алымы беҙҙең борондан килә. Бөгөн беҙгә, әйтәйек, ун баш малды һуйып йә тереләй һатыу мөһимерәк, иттән ниндәйҙер продукция эшләп һатыуға ҡарағанда. Әйтәйек, ҡаҙылыҡ, тултырма, фарш, билмән эшләүгә ҡарағанда.

**Үкенескә күрә, илебеҙҙең күп кенә иҡтисад тармаҡтары сеймал һатыуға ҡоролған. Был хәл тик беҙҙең милли ризыҡтарыбыҙға ғына ҡағылмай. Беҙ ағасты ла төбө менән һатабыҙ, ер аҫтынан сыҡҡан ҡара алтынды йыуан торбалар менән туранан-тура сит илгә оҙатабыҙ.**

- Дөрөҫ, мин шөғөлләнгән иҡтисад тармағы ул ҙур иҡтисадтың бәләкәй генә бер өлөшө. Иң тәүҙә ил кимәлендәге ҙур иҡтисад, шунан төбәк иҡтисады үҫешергә, шунан шәхси хужалыҡтар иҡтисады эҙмә-эҙлекле үҫешһә генә, дөйөм үҫеш күҙәтелер ине. Тауар етештереүсенең мәҙәниәте менән бер ҡатар һатып алыусының да мәҙәниәте юғары булыуы шарт. Беҙҙең төбәкте, илде килеп күрәм тигән кешеләрҙең дә мәҙәниәте юғары булырға тейеш. Рәсәй бөгөн бөтә донъя өсөн бикле һәм кемдеңдер мөмкинселеге, кемдеңдер теләге юҡ. Сит ил кешеләре өсөн иң ҡатмарлы виза - ул Рәсәй визаһы иҫәпләнә. Шундай шарттарҙа беҙ нисек итеп үҙебеҙгә ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙы арттыра алабыҙ? Шул уҡ ваҡытта бөгөн Рәсәй сәйәхәт итер өсөн иң арзан илдәрҙең береһе.

**Нисек уйлайһың, беҙ тәбиғәтебеҙ, сәнғәтебеҙ, мәҙәниәтебеҙ, аш-һыуҙарыбыҙ менән экзотиканы ғына тәшкил итәбеҙме?**

- Нисек кенә булмаһын, ошо ҡиммәттәребеҙ беҙҙе милләт итеп һаҡлай икән, үҙебеҙ ҙә уларҙы һаҡларға, үҫтерергә бурыслыбыҙ. Бындай ҡиммәттәре булмаған милләттәр күберәк сәйәсәт менән шөғөлләнеп, үҙҙәрен һаҡларға тырыша. Хоҙай беҙгә һаҡланыуҙың ошо юлын биргән. Башҡа халыҡтар менән буталып, болғанып бөтмәҫ өсөн ошо ҡиммәттәребеҙҙән дә яҡшыраҡ нигеҙҙәребеҙ юҡ. Телебеҙҙе, ғөрөф-ғәҙәттәребебеҙҙе, аш-һыуҙарыбыҙҙы һаҡлау ҙа милләтебеҙҙе һаҡлау менән бәрәбәр.

Беҙ хатта Мәскәүҙәр өсөн экзотика булып торабыҙ. Беҙгә илебеҙҙең баш ҡалаһынан килеүселәр ғүмерендә ошондай матурлыҡты күрмәүҙәре хаҡында белдерә. Беҙҙең тирмә эсендә һырлап биҙәлгән һандыҡ, ҡул менән һуғылған келәмдәр эленеп тора. Мин барлыҡ проводкаларҙы ер аҫтынан үткәрҙем, тирмә эргәһендә инфраструктура элементтары бөтөнләй юҡ. Беҙгә килеүселәр ошоға ныҡ аптырай, мәҫәлән, тирмә эсендә ут янып тора, проводка күренмәй, крандан һыу ағып тора, һуҙылған торба күренмәй. Беҙҙең Ирәндектең туризм өсөн мөмкинлектәре файҙаланып бөтмәгән, асылмаған. Бер яҡтан, асылмауы ла һәйбәт, сөнки тау һырты экологик яҡтан таҙа булып ҡаласаҡ.

**Аш-һыуыбыҙ беҙгә көн һайын ҡабул иткән икмәк һымаҡ ҡына, шулаймы?**

- Тап шулай. Беҙгә милли үҙенсәлекле аш-һыуыбыҙға ҡарашты әҙерәк таҙартып алырға кәрәк. Уларҙың татлы, файҙалы, ҡабатланмаҫ булыуын яңынан тойоп, һоҡланып ҡарарға бурыслыбыҙ. Әгәр ҙә ошо ҡиммәттәребеҙгә үҙебеҙҙең мөнәсәбәт үҙгәрһә, башҡа кешенең дә мөнәсәбәте үҙгәрәсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмәбеҙ аҙағында Денис менән тәбиғәтебеҙгә мөнәсәбәт хаҡында ла һөйләшеп алдыҡ. Уның: "Беҙ тыуған төйәгебеҙҙе яратабыҙ тип һөйләйбеҙ, ә ауыл тирәләрендәге бысраҡлыҡ, сүп-сар, тиреҫ өйөмдәре быны киреһен һөйләй. Урманға барһаң, аҙым һайын пластик шешәләр, ҡағыҙ тулып ята. Ауыл кешеһенә ҡый ташлап китеү бер нәмә лә тормай. Улар уны, бәлки, ҡый тип уйламайҙыр, бәлки шуға ташлап китәләрҙер, әммә тәбиғәткә ундай мөнәсәбәт булырға тейеш түгел, нимә генә тимә, тәбиғәтебеҙ - беҙҙең йөҙөбөҙ, ә битебеҙҙе беҙ көн һайын иртәнсәк йыуабыҙ..."- тигән һүҙҙәре лә беҙҙе уйландырырға тейештер.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

**✓ Алда беҙҙе төп мажара көтә! Тәрән йоҡоға сумған "яратҡан" апабыҙ өйө яғына ыңғайлайбыҙ. Алдан уҡ беләбеҙ, бындағы хәлдәр торт өҫтөндәге еләк һымаҡ буласаҡ. Ҙур кинәнес менән еп һуҙабыҙ.**



ЗАУЫҠ

Зөлфирә ҠАРАҒУЖИНА

# ҺӨЙГӨЛӘНЕП-ТӨЙГӨЛӘНЕП ҒҮМЕР ИТӘ ҺӘММӘБЕҘ



### Хәтер һәм хәтәр

*(Инсаф ҡустыма һәм МХО-ла тыныслыҡ яулап бурыс үтәгән бөтә ир-егеттәргә)*

Балам, тиеп һеҙгә әйткем килә,
Һеҙ бит балалары халҡымдың.
Мин дә бер әсәһе шул халыҡтың,
Мин дә, улдар, тиеп талпынған.
Ил яҙмышын ирҙәр хәл иткәндә,
Бик фарыздыр ҡылған ғәмәлдәр.
Тыныс йәшәп ятҡан бер әҙәм юҡ,
Хәтәрҙәре барҙа ғаләмдә.
Хәтерҙәре хәтәр тигәненең
Бер туҡтауһыҙ йөрәк ҡаҡһа ла,
Хәтер түгел, хәтәр ҡалҡып сыҡты
Хәтер ҡалҡып пәрҙә ҡорһа ла.
Ул хәтерҙә һалды олатайҙар -
Һинең, минең, уның олатаһы.
Ул хәтәрҙә ҡала ул-атайҙар -
Һинең, минең, уның ул-атаһы.
Ул хәтәрҙә ҡалды олатайҙар -
Һинең, минең, уның олатаһы.
Нисә ҡалҡып, нисә ҡолатылды,
Һеҙгә ул хәтәрҙе ҡолатаһы!
Был - нәҙере һинең олатаңдың,
Ҡолатырға! Эҙһеҙ юҡ итергә!
Тыныс Ерҙә килеп ауаз һалдың,
Киткәндә лә тыныс итергә.
Балам, тиеп һеҙгә әйткем килә,
Һеҙ бит балалары Ғаләмдең.
Һин әсәндең кендегендә түгел,
Кендегендә түгел ғаиләндең.
Һин тыныслыҡ илткән Ер улыһың,
Йыһан улы - оло дәрәжәң.
Һине ҡурсып, һине имләп тора
Үҙең тыуған, ҡорған кәрәҙең.
Һин - илеңдең ҡорос тереге.

### Аҡтамыр

Мин - аҡтамыр. Мине өҙөп, йолҡоп,
Ырғыттым да ҡотолормон тимә.
Ерҙең төпһеҙ упҡынына атып,
Юғалыр был, йотолор был тимә.
Мин - аҡтамыр. Минең тамырҙарым
Ерҙең бәрәкәтле ҡуйынында.
Һин көтмәҫһең, ә мин ҡалҡып сығам,
Ерҙең һуты менән туйынам да.
Мин - аҡтамыр. Тамырым аҡ, һеңер,
Тамырҙарым юллай тарихымды.
Яҡты киләсәккә морон төртөп,
Йәш тамырым тулай ҡарынымда.
Мин - аҡтамыр. Мин аҡ тамыры Ерҙең,
Аҡ сәлләләр кейгән аҡһаҡалы.
Аҡ доғалар ҡылған, аҡ ҡорбандар салған,
Намаҙлыҡтар йәйгән ҡартһаҡалы.
Мин - аҡтамыр. Мин сал тамыры Ерҙең,
Үткәнемдә шаҡтай туралғанмын.
Минең салым ҡурсый киләсәкте,
Ерҙең ҡусәренә уралғанмын,
Ер ҡусәре Уралыма уралғанмын,
Ерҙең ҡото булып юралғанмын.
Мин - аҡтамыр.

### Ҡот

Киң йыһандың сәхрәһендә
Яралғанбыҙ.
Олатайҙың ҡото булып
Таралғанбыҙ.
Нәҫелемдең ысын көмөш
Таралғыһы,
Атам-әсәм һөйөүенең
Яралғыһы.
Олатамдың ҡото булып,
Уты булып.
Нәҫелемдең хәтеренең
Туты булып.
Сабылғандан йәнә ҡалҡҡан
Ҡурпы булып,
Беҙ ҡалҡҡанбыҙ тамсы тере
Һуты булып.
Нәҫелемдең ысын көмөш
Хазинаһы.
Олатамдың мираҫында
Ҡаҙынамын.
Олатайҙың өмөт сәскән
Бер ҡыҙымын.
Олатайым яҡҡан утта
Ҡыҙынамын.
Атам-әсәм һөйөүенең
Тамсыһы беҙ.
Һөйөү тигән оло хистең
Ҡамсаты беҙ.
Киң һыуҙарҙа иркен йөҙәр
Ҡамсаһы беҙ.
Заман атын юрттырырлыҡ
Ҡамсыһы беҙ.
Киң йыһандың сәхрәһендә
Яралғанбыҙ.
Олатайҙың ҡото булып
Таралғанбыҙ.
Нәҫелемдең ысын көмөш
Таралғыһы.
Атам-әсәм һөйөүенең
Яралғыһы.

### Ғәмебеҙ

Йомшаҡ ҡына көнкүрелемде
Төйгөсләп тороусы бар.
Лайыҡ түгел һүҙҙәр менән
Өҙгөсләп тороусы бар.
Йомшаҡ ҡына көнкүрелдәрҙән
Һөйөләп торам әле.
Күптәр хыял итмәҫ күккә
Сөйөләп торам әле.
Һөйгән, сөйгөләгәндәре,
Төйгөләгәндәре бар.
Күктә бөркөт-ыласыны,
Төйләгәндәре лә бар.
Һөйгөләнеп-төйгөләнеп
Ғүмер итә һәммәбеҙ.
Һөйгөләнеп-төйгөләнеп
Арта беҙҙең ғәмебеҙ,
Арта беҙҙең сәмебеҙ.

### Хаслыҡ

Көнкүрелдәрҙе яралаған
Хаслыҡ бит ул.
Аслыҡтарҙан былайыраҡ
Аслыҡ бит ул.
Тәғәм ризыҡ ҡотҡаралыр
Хас аслыҡтан.
Ни ҡотҡарыр, кем ҡотҡарыр
Ас хаслыҡтан?

### Таш

Таш ташлаған кеше үҙемдеке,
Баш ашаған әҙәм минеке.
Ташты йотҡан, башты ҡурсалаған,
Әҙәми зат, мин бит һинеке.
Таш ямғыры башты яралармы,
Ҡашты емерерме - мәйелең.
Минә, тимәк, беҙгә таш яуҙыраң -
Үҙебеҙгә, аҙып бәйелең.
Эске мәҙәнилек түбән төшһә,
Ҡот юғала, ҡаса бәрәкәт.
Минә бәрелгән таш миндә ҡалыр,
Килтермәһен ғәмгә һәләкәт.
Таш ырғытыу - беҙгә һәләкәт.

### Ҡыш биҙәге

Таңһыҡ та һуң ҡарҙың тауыштары,
Ҡарҙың тыны таңһыҡ - саф тыны.
Һағындырып ҡыш миҙгеле килә,
Арҡаһында затлы ҡафтаны.
Һағындырып ҡыш миҙгеле килә,
Көйләп килә Ергә үҙ моңон.
Ҡарҙың сафлығына мөкиббән ҡыш
Йөкмәп килә, ана, аҡ тоғон.
Ҡарҙың сафлығына мөкиббән ҡыш
Бүләк итер сихри биҙәктәр.
Ҡыштың мең биҙәге араһынан
Беҙ тапмабыҙ биҙәк-иг(е)ҙәктәр.
Ҡыштың мең биҙәге араһынан
Һайлап алыр күңел бер биҙәк.
Беҙ табырбыҙ мең биҙәктең парын -
Күңелдәргә булыр игеҙәк.

ХӘТЕРЛӘП...

# БАЛА САҠ ШУҠЛЫҠТАРЫ

### Тамаҡ тамуҡҡа төшөрә

Совхоз 60-сы йылдарҙа сөгөлдөрҙө күп сәсте. Ят ризыҡ сәселгән баҫыу беҙҙең ауылға яҡын булғас, уны ике тапҡыр утау һәм һирәгәйтеү беҙҙең өлөшкә төштө. Һәр өйгә бер-ике гектар алып эшкәртә торғайныҡ. Ҡыҙыл йылғаһы буйы йәй бөткәнсе гөрләп торҙо. Төш етһә, әсәйҙәр мәҙ килеп сөй ҡайнаталар, ә беҙ, балалар, шар ҙа шор һыу инәбеҙ, аулыҡ менән һөҙөп, селбәрәләр тотабыҙ, иң бәләкәйҙәрен терелəй йотабыҙ (терелəй селбәрә йотһаң, шәп йөҙәһең, тигән һүҙ йөрөй ине малайҙар араһында). Әсәйҙәр: "Свекланы бөтһәк, Мәғниткә алып барабыҙ, туйғансы марожный ашатабыҙ",- тип дәртләндерәләр.

Эштәр бөткәс, күрше малай менән мине әсәйҙәребеҙ "гурыт"ка алып киттеләр. Барып төшкәс тә, килешкәнсә, эште иң тәүҙә "марожный" ашауҙан башланыҡ. Әсәйҙәр алып килгән йомортҡаларын һатып бөткәнсе баҙар рәттәре буйлап йөрөнөк, тағы ла туңдырма менән һыйландыҡ. Тауар һатылып бөткәс, магазиндар буйлап киттек, әммә гел "марожный" ашап, тукланып булмай ҙа инде, етмәһә, тротуар ситендә бер мәрйә, күҙҙәрҙе ҡыҙҙырып, бөйөрәк һатып ултыра. "Малайҙарҙың тирмәне шәп эшләй торған", тип, әсәйҙәр беҙгә - икешәр, үҙҙәренә бәрәр бөйөрәк һатып алдылар. Мәрйәнең ҡаршыһындағы ағас ҡыләгәһенә ултырып, ҡутара тешләп ашай башланыҡ. Шулай ашап ултыра торғас, күрше малай: "Мынау мәрйәнең ағыына һапһары йөн үҫкән", - тип ҡуйҙы. Күрше апайыбыҙ бик мәрәкәсел була торғайны. "Мәрйәләр пирашки бешергәндә ана шул йөндәрен дә ҡушып бешерәләр", - тип әйтә һалды. Ниңә генә әйтте инде - күршем бөйөрәктәрен бырағтырып ебәрҙе лә уҡшый башланы һәм ашағанын ҡоҫоп та ҡуйҙы. Аҙаҡ көнө буйына бер стакан сөйҙән башҡа лә тәғәм ризыҡ ҡапмай йөрөп ҡайтты, бахыр.

### Ҡаты ағасҡа ҡаты сөй

Бәләкәй саҡта ауылда бик ҡыҙыҡ холоҡло бер апа (бабай) булды. Ул беҙ - малай-шалайҙы ныҡ ыҙалата торғайны. Берәй ҡойма буйында ҡумаҡлешеп теҙелешеп ултырһаҡ, эргәбеҙгә килеп ултыра ла, төрлө көлкөлө хәлдәр һөйләп аптырата, ҡолаҡҡа ятмаған нәмәләр һораша. Шулай ултыра торғас, ҡапыл пинжәгенең салғыйы аҫтынан әсе кесерткән сығарып, аяҡ-ҡулдарыбыҙҙы саҡтыра. Йә булмаһа, беҙ йыйылып ултырған ергә ситән буйлап ышыҡланып килә лә, аңғармаҫтан яланғас ерҙәребеҙгә һуҡҡылай башлай. Ҡайһы ерең генә ҡысый! Беҙгә ни, һикереп тороп ҡасырға ғына ҡала ине. Ә беҙ бит трусик-майкала ғына, етмәһә, яланаяҡбыҙ.

Ләкин ваҡыт тигәнең туҡтап тормай, 5-6 йыл үтеүгә беҙ күлдәк-салбарлы булдыҡ, яланаяҡ йөрөүҙән ҙә онотолдо. Ҡыҫҡаһы, ҙурайҙыҡ. Хәҙер кис етеп, төнгә ауышһа, ауыл урамдары беҙҙеке, төрлө төнгө уйындар уйлап табабыҙ, мажаралар эҙләйбеҙ. Шуларҙың береһе - "туҡылдаҡ" эшләү. Ауыл һилләнгәс, бер кәтүк ҡара ептең осона энә, йә булавка бәйләйбеҙ, 10-15 см араныҡта бәләкәй генә гайка ныҡытабыҙ. Энәне берәй өйҙөң тәҙрә рамына ҡаҙайбыҙ ҙа, йәшенерлек урын тапҡас, ептең икенсе осон бер тартып, бер ебәреп, тәҙрә шаҡый башлайбыҙ, беҙҙеңсә әйткәндә, туҡылдатабыҙ. Һөҙөмтәлә, бәйләнсек тауышҡа өйҙәгеләр уяна... Беҙҙең өсөн иң ҡыҙығы шул. Иң тәүҙә янғыҙ йәшәгән инәйҙәрҙе бимазалайбыҙ, сөнки улар башҡаларҙан иртәрәк йоҡларға ята. Унан һуң ирҙәре төнгөлөктә эштә булған, йәки Ирәндектә йәйләүҙә мал көткәндәрҙең өйҙәренә һөжүм итәбеҙ, еңгәйҙәрҙе, апайҙарҙы уятабыҙ. Әммә улар менән ҡыҙыҡ түгел, тупһанан тороп ҡына: "Корогорҙар! Йоҡо бирмәйҙәр! Фәлән-төгән", - тип әрләүҙән ары китмәйҙәр.

Бындай күренеш беҙҙең өсөн тренировка һымаҡ ҡына. Алда беҙҙе төп мажара көтә! Тәрән йоҡоға сумған "яратҡан" апабыҙ өйө яғына ыңғайлайбыҙ. Алдан уҡ беләбеҙ, бындағы хәлдәр торт өҫтөндәге еләк һымаҡ буласаҡ. Ҙур кинәнес менән еп һуҙабыҙ, әнәне ҡаҙайбыҙ һәм яйлап ҡына епте тартып, кире ебәрә башлайбыҙ. Гайка "сыҡ-сыҡ" тигән тышҡа саҡырған тауыш бирә башлай. Сыҡылдата торғас, апаның ҡапҡаһынан сыҡҡаны күренә. Беҙ бер-беребеҙҙе тапарҙай булып ҡаса башлайбыҙ. Ул баҫтыра, беҙ ҡасабыҙ! Тыҡрыҡтан йылға буйына төшөп, баҫма аша сығабыҙ, ә ул һаман арттан килә. Боролоп ҡараған һайын ҡараңғы төндә аҡ ыштаны һәйбәт күренә. Шулай итеп, ул беҙҙе кәмендә ярты саҡрымдай баҫтыра, һис тә йыбанмай.

Бындай мажаралы операцияны йыш ҡына ҡабатланыҡ, беҙҙән һуң үҫеп еткәндәр ҙә ҡабатланы шикелле шуҡлығыбыҙҙы. Ҡаты ағасҡа ҡаты сөй, тигәндәй, бәлки, ҡатыраҡ та шаярғанбыҙҙыр...

**Мөбәрәк БАТЫРШИН.**
**Әбйәлил районы Әбдрәш ауылы.**

✓ *Сауҙа үҙәктәрендә, аэропорт, вокзалда үҙебеҙҙең башҡорт көйөн, ҡурайҙы яңғыратыу маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Ситтән килгән кешеләр ҡурай моңдарын ишетһә, шунда уҡ уларҙың иғтибарын йәлеп итәсәк икәненә иманым камил.*



ИНТЕРНЕТТАН



# КҮҘЕҢ... ышанислымы?

■ Ни өсөн ҡайһы бер кешеләргә шунда уҡ ышанаһың, ә ҡайһы берәүҙәргә юҡ? Бәктиһәң, эш күҙҙәрҙең төҫөндә икән. Чехия ғалимдары тикшеренеүҙәрҙән һуң, ошондай фекергә килгән. Ғалимдар һынауҙарҙа ҡатнашыусыларға йөҙ тәҙелөшө һәм күҙҙәр төҫө буйынса кешеләрҙе баһаларға ҡушҡан. Күптәр күк күҙле кешеләрҙе ышанислы тип тапҡан. Бынан тыш, түңәрәк йөҙлө, ҙур эйәкле ир-егеттәр тышҡы ҡиәфәтенән ышанислы күренә икән. Ә бына ҡатынҡыҙҙарҙа айырыуса "ышанислы" билдәләр күренмәгән.

■ Бөтөн Рәсәй йәмәғәт фекерен өйрәнеү үҙәге үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, Рәсәй халҡының 51 проценты дәүләт поликлиникаларында дауаланыуҙы хуп күрә. Халыҡтың 58 проценты сәләмәтлеге менән проблемалар килеп тыуһа, мотлаҡ табиптарға мөрәжәғәт итә, ә 36 проценты үҙаллы дауалана. Яуап биреүселәрҙең 52 проценты спорт менән шөғөлләнеүен белдергән. Әммә уларҙың яртыһы быны бер сығымһыҙ һәм өйҙә эшләргә тырыша. Фитнес үҙәктәренә йөрөүселәр - 12, спорт секцияларында шөғөлләнеүселәр иҫәбе 9 процент ҡына.

■ Кокос сәтләүеге майы артыҡ һимеҙлекте дауалау, шулай уҡ инсульт һәм Альцгеймер ауырыуын иҫкәртеү өсөн файҙалы. Был турала Квинсленд (Австралия) ғалимдары белдерә. Улар фекеренсә, кокос майы диабет һәм йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән яфаланыусыларға ярҙам итәсәк, сөнки был продукт холестерин кимәлен түбәнәйтә һәм инсулин кимәлен нормаға килтерә. Быға тиклем фәндә Британия ғалимдарының кокос майының кариесты булдырмаҫҡа булышлыҡ итеүе тураһындағы асышы билдәле ине. Бынан тыш, кокос майы еңел үҙләштерелә һәм матдәләр алышыныуын әүҙемләштерә.

■ Италияның Турин ҡалаһында урынлашҡан балалар дауаханаһында бәләкәй пациенттар йөрәгенең торошон контролдә тотоусы махсус футболкалар ҡулланыла башлаған. Кардиолог футболкаға сенсорҙар тегелгән һәм табиптар кардиограмма мәғлүмәттәрен, һулыш йышлығын һәм йөрәктең башҡа күрһәткестәрен тәүлек әйләнәһенә күҙәтә ала. Был ваҡытта пациенттың дауаханала булыуы мотлаҡ түгел. Әлегә тикшеренеүҙәр ике футболкала үтә. Уларҙы йыуырға һәм күп тапҡыр ҡулланырға була.

■ Америка диетологтары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, татлы ризыҡтар ашау һәм насар сәләмәтлек араһында уртаҡлыҡ юҡ. Үҙенә аҙнаһына бер тапҡыр ғына кәнфит йә торт киҫәге ашарға рөхсәт иткән кеше көнөнә бер тапҡыр тәм-том менән һыйланған кешенән бөтөнләй айырылмай. Тикшереү барышында төрлө төркөмдәге кешеләр төрлө ваҡытта төрлө күләмдә татлы ризыҡ ашаған. Хатта йыш һәм күп итеп кәнфит ашаусыға ла йөрәк-ҡан тамырҙары сире, һимереү кеүек хәүеф янамай, эш бында тыҡланыуҙа ғына түгел, ти ғалимдар. Йәғни, татлы ризыҡ ашау һимереү хәүефе менән бәйле түгел, был турала тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың тән массаһы индексы, бил һәм май ҡатламы үлсәме күрһәткестәре һөйләй. Шулай уҡ уларҙың ҡан баҫымы, холестерин кимәле, инсулин резистентлығы йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен дә булдырыу хәүефе тыуҙырмаған. Әммә был тикшеренеүҙәр тәм-томдо күп итеп ашау сәбәбе була алмай, ти ғалимдар.

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# БЕҘ БУЛҒАНБЫҘ, БАРБЫҘ, БУЛАСАҠБЫҘ!

**Үткән аҙнаның иң әһәмиәтле ваҡиғаларының береһе - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының VI съезы булды. Йыйында Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән, сит илдәрҙән 527 делегат ҡатнашты. Йыйындың ҡунаҡтарына һәм делегаттарына һорауҙарыбыҙҙы йүнәлттек:**

***Рәсих Хәмитов, БР Башлығының тәбиғәт байлыҡтарын файҙаланыу һәм экологик хәүефһеҙлек мәсьәләләре буйынса кәңәшсеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған металлургы:*** Беҙҙең секция бик йөкмәткеле үтте, унда төрлө төбәктәрҙән милләттәш эшҡыуарҙар, ғалимдар йыйылғайны һәм нисек эшҡыуарлыҡты берләштереү буйынса төбәк-ара бәйләнештәр булдырырға, тигән һорау күтәрелде. Күреп тороуығыҙса, беҙҙең күпме фермер хужалыҡтары бар, унда нимә генә үстермәйҙәр, нимә генә етештермәйҙәр. Әлбиттә, тәкдимдәр бик күп булды. Мин үҙебеҙҙең буш ятҡан ерҙәрҙе нисек эшкәртеү, шуларҙы файҙаланыуға тапшырыу тураһында фекеремде белдерҙем. Мәҫәлән, Вологод гектары бар, Ярослав гектары бар, нишләп башҡорт гектары юҡ? Ошо башҡорт гектарҙарын биреп, үҙебеҙҙең йәштәрҙе шунда эшкә ҡайтарырға ине, тигән тәҡдим әйттем. Әлбиттә, экологик мәсьәләләрҙе лә күтәрҙек, был да республика халҡы өсөн бик мөһим әлкә һәм был йәһәттән эштәрҙе нисек йәнләндерергә мөмкин булыуы тураһында һөйләштек. Бында урман хужалығы, экология, ауыл хужалығы министрлыҡтары вәкилдәре эксперттар булып ҡатнашты.

***Морат Солтанов, Октябрьский ҡалаһы 4-се Башҡорт гимназияһының тарих уҡытыусыһы, делегат:*** Йыйындың пленар ултырышында үткән биш йыллыҡта байтаҡ эштәр эшләнгәне барланды. Тормош ығы-зығыһы менән булып, уларҙың һәр береһе абайланмай ҙа ҡалған икән. Әле бына ул эштәр видеороликта һаналып киткәс, сығыш яһаусылар ҙа телгә алғас, күңел шатлыҡҡа тулды. Тормошобоҙ алға бара, шөкөр. Һәр беребеҙ шулай халҡыбыҙ һәм республикабыҙ мәнфәғәтенә эшләргә тейешбеҙ.

Киләһе уҡыу йылында Башҡортостан тарихын Рәсәй тарихы дәресенә тағы бер сәғәт ҡушып уҡытасаҡбыҙ бит инде. Мин үҙем тарихсы булараҡ, беҙгә башҡорт тарихы, Башҡортостан тарихы буйынса яҡшы сифатлы дәреслек кәрәк, тигән уй менән янам. Уны уҡыуы ҡыҙыҡлы булырға тейеш, был әсбап ниндәйҙер иҫтәлекле көндәрҙе, билдәле исемдәрҙе һанап сығыу менән генә сикләнмәһен, ул балалар ҙа, өлкәндәр ҙә ҡыҙыҡһынып уҡый алырлыҡ һәм матур иллюстрациялы булырға тейеш.

***Рөстәм Ғиззәтуллин, Башҡортостандың халыҡ артисы, делегат:*** Мин мәҙәниәт һәм киң мәғлүмәт саралары секцияһында булдым. Аныҡ тәҡдимдәр еткерҙем. Мәҫәлән, беҙҙең башҡорт йырҙарын цифралы майҙансыҡтарға күберәк һалырға кәрәк һәм уларҙы үҫтерергә кәрәк. Шуға Ҡоролтайға SMM буйынса эшләгән егет-ҡыҙҙарҙы күтәрмәләү мөһим, бәлки киләсәктә сәнғәт училищеһы, институтындамы, шундай белгестәрҙе уҡытырға, улар нәҡ мәҙәниәтте популярлаштырыу, үҫтереү, алға этәреү менән шөғөлләнергә тейеш.

Был хаҡта ла күп һөйләйбеҙ инде: беҙҙең сауҙа үҙәктәрендә, аэропорт, вокзалда үҙебеҙҙең башҡорт көйөн, ҡурайҙы яңғыратыу маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Хәҙер бит республикала туристарҙы йәлеп итеү буйынса бик күп проекттар эшләй. Ситтән килгән кешеләр ҡурай моңдарын ишетһә, был шунда уҡ уларҙың иғтибарын йәлеп итәсәк икәненә иманым камил.

Республикала мәҙәниәт өлкәһе иғтибарҙан ситтә түгел. Әммә күптәр "Быңа шулай итергә, тегеләй итергә кәрәк" тип, буш һүҙ һөйләүҙән ары китә алмай. Аныҡ тәҡдимдәр әҙерәк. Бына беҙ, мәҫәлән, башҡорт халыҡ йырҙары цифралы майҙансыҡтарҙа юҡ, тип әйттек һәм ишеттеләр. Беҙҙең етәкселәр креативтар, уларға аныҡ тәҡдимдәр менән барһаң, һәр ваҡыт ярҙам ҡулы һуҙырға әҙерҙәр.

***Ғәли Хәсәнов, Татарстан Республикаһы башҡорттарының төбәк милли-мәҙәни автономияһы етәксеһе:*** Беҙҙең милли-мәҙәни автономия ойошмаһын билдәле ғалимыбыҙ Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитов кәңәше менән төҙөгәйнек. Ул минең остазым булды. "Әйҙә, ҡустым, милли-мәҙәни автономиялар тураһында закон сыҡты, әле башҡорт ойошмалары юҡ, иң беренселәрҙән булып төҙөйөк әле шуны", - тип әйтте ул. Шулай ойошоп киттек, бөгөн бик юғары кимәлгә күтәрелдек, Татарстан Республикаһы Рәйесе премияһын алдыҡ. Татарстан етәксеһенең был премияһы йылына 5 кенә ойошмаға бирелә, шулар араһында беҙҙең автономия булыуы һөйөнөслө. Ул беҙҙең граждан-йәмғиәт институттарын үҫтереүҙәге эшмәкәрлегебеҙгә ҙур баһа булды. Беҙҙең социаль, йәштәр өсөн, этно-мәҙәни проекттарыбыҙ ҙа Президент фонды гранттарын алды. Төп маҡсатыбыҙ - балаларҙы, йәштәрҙе үҙебеҙҙең башҡорт теле, йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре йолғонтоһонда тәрбиәләү. Беҙ шул эш менән шөғөлләнәбеҙ. Этно-мәҙәни берләшмәләр, власть органдары, бизнес, мәҙәниәт һәм мәғариф өлкәһендәге ғилми берләшмәләр менән дә тығыҙ бәйләнештәбеҙ.

Беҙҙең Яр-Саллы ҡалаһында Айгөл Илдар ҡыҙы күп йыллар дауамында башҡорт кластарында белем бирә, Яр-Саллы һәм Түбәнге Кама ҡалаларындағы Халыҡтар дуҫлығы йорттары эргәһендә башҡорт телен һәм мәҙәниәтен өйрәнеүселәр клубтары бар, Ҡаҙан ҡалаһының күп милләтле йәкшәмбе мәктәбендә башҡорт телен дә өйрәтәләр. Башҡорттарҙы шулай берләштереп йыйабыҙ. Үҙебеҙҙең йәмәғәт эштәренә йәлеп итәбеҙ.

***Әнисә Мәүлекәйева, Пермь крайы Барҙа районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесенең урынбаҫары:*** Беҙҙең Пермь крайы Барҙа районында күпселек ғәйнә башҡорттары йәшәй. Ырыуҙаштарыбыҙ 61 ауылда тора. Мәктәптәрҙә татарса уҡыталар ҙа, беҙ үҙебеҙҙең туған телебеҙҙе бер ҡасан да онотмайбыҙ, сөнки ғәйнә теле - иң боронғо телдәрҙең береһе. Туған телебеҙ арҡылы беҙ төрөксә лә, татарса, ҡырғыҙса, үзбәксә лә аңлайбыҙ. Йәштәребеҙ ҙә ғәйнә башҡорттарына хас һөйләште

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# ВАТАНДЫ ҺӨЙӨҮ - ИМАНДАН



**Хәмзә хәҙрәт ХАФИЗОВты республикабыҙҙа белмәгән кеше һирәктер. Махсус хәрби операция башланғас, ул башҡорт батальондарының рухи остазы, полк имамы сифатында алғы һыҙыҡҡа юлланды. Хәмзә хәҙрәт үҙенең сираттағы ялында "Башинформ"ға башҡорт яугирҙарының берҙәмлеге, фронт һәм тылдың эшмәкәрлеге һәм башҡа мөһим мәсьәләләр хаҡында һөйләне.**

➔ **Башҡортостан - Махсус хәрби операция бурыстарын үтәүгә иң ҙур өлөш индергән төбәк, тип баһаларға мөмкиндер?**

- Ысынлап та, Ватан һағына иң беренселәрҙән булып тап республикабыҙ ир-егеттәре баҫты. Уларҙы төрлө кәрәк-яраҡтар менән тәьмин итеү йәһәтенән гуманитар ярҙам йыйыу ойошторола башланы. Рәсәйҙәге иң тәүге ирекле батальон тап беҙҙең республиканан ебәрелде. РФ Оборона министрлығы тәьминәтенән тыш, Башҡортостан Хөкүмәте һалдаттарҙы баштан-аяҡ кейендерҙе, ҡоралдан башҡа бөтә кәрәк-яраҡтарҙы ебәрҙе. Ҡыҫҡаһы, иң ҙур яуаплылыҡты Башҡортостан Башлыһы Радий Хәбиров үҙ өҫтөнә алды.

➔ **Махсус хәрби операция зонаһына барыу хаҡындағы ҡарарҙы нисек ҡабул иттегеҙ?**

- Махсус хәрби операция башланғандың тәүге айында, егеттәр һәләк булғас, мин баш мөфтөйгә юлландым, Махсус хәрби операция биләмәһенә, теләһә ниндәй нөктәһенә ебәрегеҙ, тип үтендем. 2022 йылдың майында беҙҙе, дин әһелдәрен, хәрби хәрәкәттәр биләмәһенә ебәреү хаҡында бойороҡ сығарылды. Тарихҡа күҙ һалһаң, һәр ғәскәрҙә дин эшмәкәрҙәре, полк имамдары булған. Муллалар хатта һыу ағты көмәләрендә хеҙмәт иткән. Беҙ егеттәргә рухи һәм психологик яҡтан ярҙам күрһәтәбеҙ. Һуғышта атеистар юҡ, тиҙәр. Унда һәр кемдең күңеле йомшара. Айырыуса иптәштәре һәләк булғанын күргән егеттәр рухи яҡтан бирешергә мөмкин. Мин уларға аяттар уҡыйым, иҫән-һау ҡайтыуҙарын теләп, доғалар ҡылабыҙ.

➔ **Башҡортостан яугирҙары дошманға ҡаршы нисек көрәшә?**

- Беҙҙең егеттәрҙе бар ерҙә лә хөрмәт итеп торалар. "Башкортостан? О, ваши ребята такие отважные, дружные, лов-

белә, сөнки ул һөйләш ғаиләлә һаҡлана. Мәктәптә рус кластарында уҡығандар иһә, тик гәйнәсә генә белеп, татар телен бөтөнләй аңламай. Телебеҙҙең үҙенсәлектәре күп, мәҫәлән, көн тәртиптәрен генә алайыҡ: тыуған көн, атлаған көн, ҡан көн, аҙна кис, йома, ҡоро көн, урыҫ әтнә көн. Күренеүенсә, шәмбене ҡоро көн, ҡош та оя ҡормай, тигәндәр, ә хәҙер тоталар ҙа ошо көндә туй яһайҙар. Бында уйланырға, телебеҙҙен, йолаларыбыҙҙың нескәлектәрен онотмаҫҡа кәрәк, тип әйткем килә. Башҡорт халҡының нигеҙе - ырыуҙарҙың көслә булыуында, халҡыбыҙҙы һаҡлап ҡалырға теләһәк, һәр ырыу ата-бабаларҙан ҡалған белемдә, телдә, йолаланы онотмаҫҡа тейеш.

***Илшат Рәхмәтуллин, Башҡортостандың РФ Президенты ҡарамағындағы тулы хоҡуҡлы вәкиленең урынбаҫары:*** Йыйында мин Рәсәй төбәктәрендәге башҡорт ҡоролтайҙары секцияһында модератор булып сығыш яһаным. Төбәктәрҙәге эшкә ҡағылышлы бик ҡыҙыҡлы тәҡдимдәр яңғыраны, сөнки башҡорттарҙы борсоған мөһим проблемалар, гәҙәттә, Башҡортостандан ситтә йәшәгән милләттәштәрҙә бик киҫкен тора. "Башҡортостанда башҡорт булыуы еңел ул, ситтә башҡорт булып ҡара", тип тә юҡҡа ғына әйтмәйҙәр. Был һөйләшеүҙән миңә иң оҡшағаны һәм иҫтә ҡалғаны - ул башҡорт телен өйрәнеүгә йүнәлтелгән лагерҙар һанын арттырыу булды. Мәскәүҙә был бар, унда башҡорт телен өйрәнеү буйынса этно-мәҙәни клуб эшләп килә, балалар унда бик яҡшы итеп телде өйрәнә. Үҙем атай кеше булараҡ, был мәсьәлә бик актуаль. Төрлө саралар, осрашыуҙарҙы башҡорт телендә үткәрәбеҙ һәм был туған телебеҙҙе өйрәнеүгә этәрә, әммә тулыһынса шул тел мөхитенә инеү етеңкерәмәй. Делегаттар әле Башҡортостандан ситтә йәшәгән балаларҙы йыл әйләнәһенә ҡабул итә алған башҡорт теле лагерҙары булһын ине, тигән тәҡдим индерҙе. Балалар бында ял итергә килеп, 3 аҙна буйы тулыһынса үҙебеҙҙең туған тел, мәҙәни мөхиттә йәшәп, ысын башҡорт булып таралашыр ине, тигән фекерҙә улар. Был ысынлап та бик кәрәкле эш булыр ине. Ғөмүмән, тәҡдимдәр күп яңғыраны, резолюция проектын ҡабул иттек, унда әле ҡорҙан һуң да тыуған фекерҙәрҙе, тәҡдимдәрҙе индереп буласаҡ.

***Данис Аҡкужин, Силәбе өлкәһенән делегат:*** Мин бик оҙаҡ йылдар дзюдо буйынса балалар тренеры булып эшләнем, тәрбиә менән шөғөлләндем. Үҙем билдәле тренер Харис Монасип улы Йосоповтың тәрбиәләнеүсеһемен. Ҡайһы саҡта Силәбе физик культура университетында лекциялар уҡыйым, тренерҙар менән эшләйем. Арғаяш районынанмын. Беҙҙә күп кенә мәктәптәрҙә башҡорт теле дәрестәре үткәрелә, әммә йылдан-йыл туған телебеҙҙә аралашҡан һәм уҡыған балалар һирәгәйә. Бөгөн ҡоролтайға мин шундай фекерҙәр менән килдем: иң төп мәсьәлә - ул балалар тәрбиәһе. Бөгөн балалар һәм өлкәндәр араһында аралашыу юҡ, быуындар бәйләнеше өҙөлә, аңлашылмаусанлыҡтар килеп тыуа, балаларҙың холҡо үҙгәрә. Беҙҙең башҡорттарҙа ололарға хөрмәт менән ҡарау бар әле, өлкәндәр әйткәндә үтәү бар, әммә быларҙың барыһы ла үҙгәрә. Интернеттың, төрлө фильмдар, бигерәк тә көнбайышта төшөрөлгәндәренең йоғонтоһо ҙур. Балаларыбыҙ көнбайыштыларҙыҡылы кеүек булып бара, шуға юл ҡуйғы килмәй. Беҙҙекеләрҙе төҙәтеп өлгөрөргә кәрәк, был мөмкин әле.

***Римма Хущамова, Саха (Якутия) Республикаһынан делегат:*** 2010 йылда үҙем йәшәгән ошо республикала башҡорт ойошмаһын ойошторҙом. Киләһе йылда беҙҙең ойошмабыҙға 15 йыл туласаҡ. Ошо матур датаны билдәләп, эстафетаны йәштәргә тапшырып, тыуған яҡтарыма күсеп ҡайтырға ниәтләнеп йөрөп ятам. Беләһегеҙҙер, был республикала 1760 йылдарҙа һөргөнгә ебәрелгән башҡорттар байтаҡ бит инде, улар хәҙер урындағы халыҡтар менән аралашып та бөткән һәм төп сығыштарын белмәгәс, кемдәрҙер үҙен татарға ла иҫәпләй. Сөнки халыҡ иҫәбен алыу буйынса документтарҙы ҡарағайныҡ, 1895 йылда 1012 башҡорт һәм 4 кенә татар була, ә 1905 йылда бөтәһе лә татар тип яҙыла. Бөтәһе лә үҙенең тамырҙарын белеп тә бөтмәй, әммә шәжәрәләрен эшләй башлаһалар, гел үҙҙәрен Башҡортостанда барып табалар.

Мин бөгөн төрлө секцияларҙа булып, төрлө фекерҙәрҙе тыңлап сыҡтым. Үҙем дә тәҡдимдәр әйттем. Иң төп һүҙем - йәштәрҙе, бигерәк тә йәш ғаилә башлыҡтарын, сит яҡтарға эшкә йөрөтмәү өсөн саралар күреү кәрәклеге тураһында булды. Ярай, бына беҙҙең яҙмыштарҙы ситкә эшкә ебәреү тураһындағы совет системаһы хәл итеп, тыуған яҡтан айырҙы. Хәҙер бит үндай бойороҡ-указдар юҡ, егеттәребеҙ ғаиләләрен ҡалдырып, оҙон аҡса артынан йөрөмәһен ине. Ошо теманы ныҡлы фекер алышыу майҙанына сығарыу кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының VI съезы барышында бик күп мөһим мәсьәләләр күтәрелде, сығыш яһаусылар берҙәмлек, фекерҙәр уртаҡлығы, киләсәктә эшләйһе эштәр тураһында һөйләне. Ҡорҙоң төп өлөшөндә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты һәм башҡорт телен, мәҙәниәтен үҫтереү йәһәтәнән бик күп матур эштәр атҡарылыуы тураһында телгә алды. Ысынлап та, Башҡорт теле буйынса халыҡ-ара диктант булһынмы, Милли кейем көнө, йәки Башҡортостандың Ҡурайсылар дәүләт ансамблен булдырыу кеүек бик күп мөһим ҡарарҙар нәҡ ошо биш йыллыҡта ҡабул ителгән. Киләһе йылдан башҡорт профессиональ бейеү сәнғәтенә нигеҙ һалыусы хореограф, балетмейстер Фәйзи Ғәскәровтың тыуған көнө - 21 октябрҙә Милли бейеү көнө билдәләнәсәк. Был да башҡорт сәнғәтен үҫтереүгә булышлыҡ итер бер бик матур дата булыр, моғайын. Ә инде социаль-иҡтисади үҫеш һәм эшҡыуарлыҡ темаһына арналған секцияларҙы сығыштарҙы тыңлағандан һуң, алдынғы ҡарашлы, үҙ эшен булдырып уныш ҡаҙанған милләттәштәребеҙҙең күп булыуын, бигерәк тә маҡсатлы йәштәребеҙ барлығын күреп ҡыуандыҡ. Ниндәйҙер өлкәләрҙә хәл ителмәгән мәсьәләләр барҙыр ҙа, әммә арабыҙҙа киләсәккә ышаныслы аҙымдар яһаған шундай йәштәребеҙ булғанда, заман менән алға атларыбыҙға шик юҡ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

кие. Уважаем!" тиҙәр. Шул тиклем ғорурлыҡ кисерәбеҙ шундай һүҙҙәрҙе ишетеп. Яугирҙарыбыҙҙың дингә ынтылыуы ла ҡыуаныслы. Егеттәр беҙ килеү менән йыйылып китә. "Хәҙрәт, әйҙә ҡорбан салайыҡ", тип мөрәжәғәт итәләр. Ҡайҙандыр һарыҡ табалар. Ҡорбанлыҡ эҙләп, 40-50 саҡрым сығып та китәләр. Бер-береһенә шылтыраталар йә "Ахмат"тан барып алалар.

Яу яланында күп йәш егеттәрҙе күрергә насип булды. Улар алғы һыҙыҡҡа ағайҙары, дуҫтары артынан килде. Бер егет, минең дуҫтарым хеҙмәт итергә китте, улар ветеран булып ҡайтасаҡ, ә мин уларҙың күҙ алдында үҙемде нисек тоторға тейешмен, ти. Бер яҡтан, был - ғорурлыҡ, икенсе яҡтан, улар быуынына бик ауыр бурыс төшкәнен күреү аяныслы.

➔ **Һалдаттарға тылдың, халыҡтың ярҙамы етәме? Был йәһәттән егеттәрҙең зарланғаны булманымы?**

- Бөгөн МХО биләмәһендә һалдаттарға, тылда уларҙың ғаиләләренә бөтә төр ярҙам да күрһәтелә. Был яҡтан күңел тыныс. Әммә бер кире күренеш тураһында әйтмәй булдыра алмайым. Мәҫәлән, ҡайһы бер егеттәргә ғаиләләренең ярҙамы, терәк-таяныс булыуы етмәй. Үкенескә күрә, әйтәйек, ҡайһы берәүҙәренең ҡатындары "йәшел йылан" менән мауыға. Был хәбәр яугирға килеп етә. Ул алғы һыҙыҡта, уның ҡулында - ҡорал. Ул хис-тойғоға бирелә, гәрлектән үҙ ғүмерен ҡыйыр хәлгә етә. Суицидҡа бара күрмәгеҙ - тамуҡҡа эләгәһегеҙ, тип әйтеп торам. Ҡатын-ҡыҙҙар бер аҙ уйланһын, ирҙәренә терәк булһын, балаларына яҡшы тәрбиә бирһен, тип кәңәш итер инем.

Ҙур мәсьәләләргә килгәндә, бөгөн ил эсендә аңлашылмаусанлыҡтар булдырмаҫҡа кәрәк. Әгәр тыл берҙәм була икән, һалдаттарға ла Махсус операция бурыстарын үтәү, Еңеү яулау еңелерәк буласаҡ.

➔ **Ил эсендә аңлашылмаусанлыҡтар нилектән килеп сыға?**

- Бөгөн илебеҙ Махсус хәрби операция алып бара, ҡыҫҡаһы, һуғыш бара, ил эсендә бола ҡуптарырға тырышыу - ул Көнбайыштан килгән сәйәсәт бит. Башҡортостанда ғына түгел, Рәсәйҙә властҡа ҡаршы кешеләр НАТО илдәренең ҡулында "ҡурсаҡ" булып ҡалды. Улар матди байлыҡҡа алданып, ил эсендә ғауға сығарып, уны көсһөҙләндереү буйынса сәйәсәт алып бара башланы. Беҙ улар менән көрәшергә тейешбеҙ. Шәхсән үҙемә лә кире фекер әйткәндәре булды, был беҙҙең һуғыш түгел, тип ебәрә бәрҙеләр. Ошо йәһәттән тәрбиәүи эш алып барырға кәрәк. Әгәр ошо илдең мәнфәғәтен күрһәң, дауаханалары, мәктәп-вуздары менән файҙаланаһың, эшле лә, ризыҡлы ла булып йәшәйһең һәм шундай ауыр осорҙа бола ҡуптарырға тырышаһың икән, мотлаҡ закон буйынса яуап бирергә тейешһең...

**Инсаф ХУЖАБИРГӘНОВ.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Егерме дүртенсе хат: "Бәхетле булайыҡ" (Мәктәп уҡыусыһы хатына яуап)

Ҡәҙерле Сережа! Һин боронғо биналарҙы, боронғо әйберҙәрҙе - кешене элек һәм бөгөнгө тормошонда оҙатып барған нәмәләрҙе яратып, дөрөҫ эшләйһең. Былар барыһы ла кешенең аңына һеңеп кенә ҡалмаған, ә үҙе лә кешеләрҙән ниҙер алған төҫлө. Тәү ҡарамаҡҡа, әйберҙәр матди, ә улар беҙҙең рухи мәҙәниәтебеҙҙең бер өлөшөнә әүерелгән, "күңелебеҙ" тип шартлы рәүештә атарға булған эске донъябыҙ менән ҡушылған. Сөнки беҙ "бар күңелдән", йәки "күңел өсөн кәрәк", "күңел һалып эшләнгән" тибеҙ бит. Бына шулай! Күңел һалып эшләнгән, күңелдән килгән, күңелгә кәрәк бөтә әйбер - шул "рухи мәҙәниәт" була ла инде. Кеше ни тиклем күберәк ошо рухи байлыҡ менән уратып алынһа, ул шул тиклем бәхетлерәк, уға йәшәүе шул тиклем ҡыҙыҡлыраҡ, ғүмере мәғәнәлерәк була. Ә эшкә, уҡыуға, иптәштәренә һәм таныштарына, музыкаға, сәнғәткә тик рәсми мөнәсәбәттә генә булыуҙа был "рухи мәҙәниәт" юҡ. Бына шул рухһыҙлыҡ инде - бер нәмә лә тоймаған, яратырға, үҙен ҡорбан итергә, әхлаҡи һәм эстетик идеалдар йөрөтөргә һәләтһеҙ механизм тормошо.

Әйҙәгеҙ, бәхетле кешеләр булайыҡ, йәғни яҡын күргән нәмәләребеҙ булһын, ниндәйҙер әһәмиәтле нимәнелер тәрән һәм етди һөйәйек, яраткан эшебеҙ һәм кешеләребеҙ өсөн үҙ-үҙендә ҡорбан итә беләйек. Быларһыҙ кеше - бәхетһеҙ, күңелһеҙ ғүмер кисерә, буш табыштар артынан ҡыуып йәки ваҡ, түбән "тиҙ боҙолоусан" рәхәтлектәрҙә үҙҙәрен юғалтҡан әҙәм.

## Егерме бишенсе хат: "Выждан ҡушыуы буйынса"

Үҙ-үҙеңдә яҡшы тотош кемдер биргән кәңәштәргә таянып түгел, ә күңел талабына ҡарап билдәләнә. Күңел талабы иһә, ул аңһыҙ рәүештә булғанда айырыуса шәп. Уйлап тормайса, оҙаҡ фекер йөрөтмәйсә генә дөрөҫ эшләргә кәрәк. Үҙеңдән-үҙең яҡшы эшләү, кешеләргә изгелек ҡылыу - кешеләге иң ҡиммәт нәмә.

Әммә кешенең был күңел талабы һәр ваҡытта ла тыуғандан алып бирелмәй. Ул кешегә тәрбиә менән һалына һәм нигеҙҙә, үҙүҙен тәрбиәләү аша килә - быға уның дөрөҫлөккә, яҡшылыҡҡа таяныш йәшәргә тәүәккәллеге булышлыҡ итә.

Беҙ велосипедта йөрөргә өйрәнәбеҙ һәм башта дуҫтарҙың ябай ғына кәңәштәренә ҡолаҡ һалабыҙ: рулде ҡолап барған яҡҡа борорға. Тиҙҙән бер ниндәй ҡағиҙәләр тураһында уйламайса елдерә башлайбыҙ, ғүмер буйы яҡшы һәм иркен йөрөйбөҙ.

Үҙемдең "хаттарымда" ла мин "велосипедта йөрөү буйынса" ҡатмарлы булмаған ҡағиҙәләр тәҡдим итәм - намыҫ һәм дөрөҫлөккә таяныш йәшәргә. Әммә был тик башта ғына кәрәк. "Выждан ҡушыуы буйынса" интуицияға таянып йәшәргә кәрәк, уйланып тормайса, китаптар аҡтармайса ла дөрөҫ ҡарарға килергә. Тормош велосипедта йөрөүгә ҡарағанда күпкә ҡатмарлы. Шуға кәңәштәрҙе лә күберәк бирергә тура килә.

Әммә бына нимәгә иғтибар итегеҙ. Велосипедта яңы ғына йөрөргә өйрәнгән саҡта һеҙ ҡайһы яҡҡа борolорға икән, тип уйлағанда күп көс түгәһегеҙ. Ә өйрәнеп алғас, уйлап та тормайһығыҙ - арымайһығыҙ ҙа, тиерлек. Һәм бына минең кәңәш: уйлап тормайса, шунда уҡ дөрөҫ ҡарарҙар табырға өйрәнегеҙ. Йәшәүе еңел буласаҡ.

Шуның өсөн минең "Изгелек һәм гүзәллек тураһында хаттар"ым һеҙгә башта ғына кәрәк булырға тейеш. Артабан яҡшылыҡҡа таянып йәшәгеҙ, был хаттарҙа яҙылған ҡағиҙәләр тураһында уйланмағыҙ. "Ҡағиҙәләр" тик юлдың башында ғына кәрәк. Былай саҡта нисек йөрөһәгеҙ, изгелек юлдарында ла шулай ябай һәм сәбәп эҙләмәй генә йөрөргә ынтылығыҙ. "Башланғыс дәүмәлдәр"ҙе дөрөҫ һайлаһағыҙ, беҙҙең тирә-яҡ донъя тип аталған хозур баҡсабыҙҙағы һуҡмаҡтар һәм юлдар шул тиклем дә еңел, шул тиклем дә уңайлы һәм уларҙағы осрашыуҙар ҡыҙыҡлы була.

Шулай итеп, минең хаттарҙы уҡығандан һуң, уларҙы ситкә һалып ҡуйығыҙ һәм үҙегеҙ өсөн дөрөҫ ҡарарҙарҙы үҙегеҙ табығыҙ, яңылыш аҙым яһамаҫҡа тырышығыҙ, бөтә нәмәне йөрәгегеҙ менән хәл итегеҙ.

Ә мин һеҙгә ҡул болғап ҡалырмын...

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**



### 23 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 11.40, 12.15, 0.10, 0.55, 1.40, 2.25, 3.05, 3.15, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.00, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Комбинация". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 15.55, 2.30, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Последний богатырь. Наследие". [6+]
23.50 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.30 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Новости недели (на русс. яз.). [12+]**
**12.00 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**12.15, 13.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башкорттар. [6+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**16.45 Х/ф "Советник". [12+]**
**17.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Амур" (Хабаровск). КХЛ.**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**2.45 Спектакль "Мою жену зовут Морис". [12+]**

### 24 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Комбинация". [16+]
0.15, 1.00, 1.50, 2.35, 3.05, 3.25, 4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 15.55, 2.10, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30, 22.40 Т/с "Последний богатырь. Наследие". [6+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 23.45 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Городок АЮЯ. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 "100 имён Башкортостана". [12+]**
**17.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Үткән гүмер. [12+]**
**19.00, 4.30 Телецентр. [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Х/ф "Оберег". [12+]**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**2.15 Спектакль "Зятёк". [12+]**

### 25 ДЕКАБРЯ СРЕДА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Комбинация". [16+]
0.10 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.10, 1.55, 2.40, 3.05, 3.25, 4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 15.55, 2.10, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Последний богатырь. Наследие". [6+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15, 13.45, 16.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Физ-ра. [6+]**
**15.30 Зерно. [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Амур" (Хабаровск). КХЛ.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**2.30 Спектакль "Девушка с монистами". [12+]**
**4.00 Телецентр. [12+]**
**5.00 Үткән гүмер. [12+]**

### 26 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Комбинация". [16+]
0.15, 1.05, 1.50, 2.35, 3.05, 3.25, 4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 15.55, 2.10, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Последний богатырь. Наследие". [6+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан.**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 12.15, 13.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Сулпылар-2024. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**16.45 Мегасело. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Йома. [6+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**19.45 Мама. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 "Башкорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**21.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**22.00, 5.00 Республика LIVE #дома.**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**2.30 Спектакль "Кодаса или Полснохи меньшему брату". [12+]**
**4.30 Автограф. [12+]**

### 27 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
14.40 "АнтиФейк". [16+]
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Фантастика". Следующий уровень. [12+]
23.40 Спецпроект. "30 лет вместе". [16+]
1.30, 2.15, 3.05, 4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 15.55 Т/с "Райский". [16+]
17.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Х/ф "Последний богатырь: Посланник Тьмы". [6+]
23.30 Х/ф "Сказки Гофмана". [16+]
1.20 Х/ф "Раз, два! Люблю тебя!" [16+]
4.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.30 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Йома. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00, 13.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.15 Ҡурай даны. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Хазина. [6+]**
**16.45, 21.15 Ради добра. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Башкорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Мегасело. [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15, 4.45 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Ете егет. [12+]**
**0.00 Ҡурай-шоу. [12+]**
**2.45 Спектакль "Караул, тещу украли!" [12+]**
**5.00 Хазина. [12+]**

### 28 ДЕКАБРЯ СУББОТА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
14.35 "АнтиФейк". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Народный ледниковый". [0+]
20.05 "Эксклюзив". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.35 Премьера. "Закрытый показ". [16+]
2.30, 3.20, 4.05, 4.50, 5.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
8.00, 9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
8.10 "По секрету всему свету".
8.35 Формула еды. [12+]
9.20 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.50 Доктор Мясников. [12+]
12.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
17.50 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Пока брак не разлучит нас". [16+]
0.40 Х/ф "Роковая женщина". [16+]
3.55 Х/ф "Ясновидящая". [16+]
5.36 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**9.00 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Әкиәтсе. [6+]**
**10.45 Преград. Net. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Ат уйнатып. [12+]**
**12.00 Елкән. [6+]**
**12.30 Ете егет. [6+]**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30, 5.30 Башкорттар. [6+]**
**15.00 Счастливый час. [12+]**
**16.00, 4.30 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Герой нашего времени. [12+]**
**18.15 Ради добра. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Северсталь" (Череповец). КХЛ.**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 1.45 Новости недели (баш. яз.).**
**23.15 "Башкорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.30 Концерт памяти Хусаина Ахметова. [12+]**
**2.30 Спектакль "Весело живём". [12+]**

### 29 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 0.15, 1.00, 1.45, 2.30, 3.20, 4.05, 4.50, 5.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 Д/ф "Много лет я не сплю по ночам". К юбилею Михаила Боярского". [12+]
11.05 "Играем свадьбу!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.10 "Наше всё". [12+]
14.00 "ПроУют". [0+]
14.50 Х/ф "Ёлки-иголки". [12+]
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Точь-в-Точь". [16+]
21.00 "Время".
23.00 "Что? Где? Когда?" Зимняя серия игр. [16+]

### РОССИЯ 1

5.40, 3.15 Х/ф "Китайский Новый год". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 16.00 Вести.
11.30 Большие перемены.
12.30 Х/ф "Призрачное счастье". [12+]
16.30, 19.00 Песни от всей души. [12+]
17.30 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.35 Х/ф "Сильная слабая женщина". [16+]
4.58 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Тормош. [12+]**
**8.15, 5.15 Ради добра. [12+]**
**8.30 Күстәнәс. [12+]**
**9.00 Ҡурай даны. [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 Зерно. [6+]**
**12.00 Сулпылар-2024. [6+]**
**12.30 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**13.15, 3.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.45 Дорога к храму. [6+]**
**16.15 Честно говоря. [12+]**
**17.00 Концерт Искандара Газизова. [12+]**
**19.00 Мегасело. [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Патриот РФ. [12+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на русс. яз.). [12+]**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Концерт Фарваза Урманшина. [12+]**
**0.45 Спектакль "Морозное дыхание метели". [12+]**
**3.45 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**4.00 Колесо времени. [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Декабрь (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ақшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 23 (22) дүшәмбе | 7:52 | 9:41 | 13:30 | 15:05 | 16:49 | 18:39 |
| 24 (23) шишәмбе | 7:52 | 9:41 | 13:30 | 15:05 | 16:50 | 18:40 |
| 25 (24) шаршамбы | 7:53 | 9:41 | 13:30 | 15:06 | 16:50 | 18:40 |
| 26 (25) кесе йома | 7:53 | 9:41 | 13:30 | 15:07 | 16:51 | 18:41 |
| 27 (26) йома | 7:54 | 9:42 | 13:30 | 15:07 | 16:52 | 18:41 |
| 28 (27) шәмбе | 7:54 | 9:42 | 13:30 | 15:08 | 16:53 | 18:42 |
| 29 (28) йәкшәмбе | 7:54 | 9:42 | 13:30 | 15:09 | 16:54 | 18:43 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# "ӘЛИФБА" ТӨҘӨҮСЕЛӘР

**Башҡорттар төрлө дәүерҙә боронғо төрки рун яҙмаһын, боронғо уйғыр, ғәрәп, латин яҙмаларын һәм кириллица ҡуллана.**




Кириллица - әлеге көндә ҡулланылған алфавит. Был алфавитта 42 хәреф, шуларҙың туғыҙы телдең үҙенсәлекле өндәрен билдәләй - *Ә ә, Ө ө, Ү ү, Ғ ғ, Ҡ ҡ, Ң ң, Ҙ ҙ, Ҫ ҫ, Һ һ* хәрефтәре. Бөгөнгө көндә ҡулланылған башҡорт алфавиты 1940 йылда ҡабул ителгән. Тағы шуныһы иғтибарға лайыҡ: *Ҡ ҡ, Ҙ ҙ* хәрефтәре башҡа бер төрки телдә лә осрамай.

Хәрефтәрҙең урынлашыу тәртибе урыҫ алфавитындағыса ҡабул ителгән. Башҡорт теленең специфик өндәре өсөн алынған яңы хәрефтәр, ғәҙәттә, урыҫ графикаһындағы ҡайһы хәреф нигеҙендә яһалған булһа, башҡорт алфавитында шул урыҫ хәрефе артынса ҡуйылған. Шуныһы ҡыҙыҡ: *ң, ҫ, ъ, ь* хәрефтәренең яҙыуҙа баш хәреф варианттары ҡулланылмай, сөнки башҡорт яҙма әҙәби телендә был хәрефтәр менән башланған һүҙҙәр юҡ.

Урыҫ графикалы алфавитҡа күсеү мәсьәләһе ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитетында 1938 һәм 1939 йылдарҙа ике мәртәбә тикшерелә һәм башҡорт теленең яңы алфавитын һәм орфографияһын төҙөү буйынса комиссия ойоштороla. 1939 йылдың декабрендә Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы урыҫ графикаһы нигеҙендә төҙөлгән башҡорт алфавитын һәм орфографияһын раҫлау һәм был алфавит менән орфографияға күсеүҙе 1940-1941 йылдарҙа тамамлау тураһында указ ҡабул итә. Башҡорт әҙәби теленең яңы алфавиты һәм орфографияһы 1940 йылда айырым китап булып баҫылып сыға. 1950 алфавитҡа *Ё, ё* хәрефе өҫтәлә һәм нәҡ ошо вариант әлеге көндәрҙә ҡулланыла.

Шулай итеп, хәҙерге башҡорт алфавиты һәм орфографияһының ярты быуаттан артыҡ тарихы бар.




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**49-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Сибай. Ашҡаҙар. Рәсем. Алаша. Бүгәс. Мөғлифә. Буддизм. Зулус. Азамат. Абхаз. Күк. Ильяс. Әмер. Ринг. Томан. НЛО. Әсә. Вольтер. Кәкүк. Элмәлек. Любизар.

**Вертикаль буйынса:** Буранбай. Абдрахман. Илизаров. Арыш. Оруэлл. Амман. Соҡор. Кегль. Тәкә. Сәлимәкәй. Әреме. Йәрем. Кер. Бәз. Иртәк. Урал. Улъя. Сәс. Сөн.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**23-29 декабрь Премьера! "Әкиәт илендә мажаралар"** (В. Коростылев), әкиәт. 10.00, 12.00 6+

**25 декабрь "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов), музыкаль комедия. 12+

**27 декабрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**23-26 декабрь Премьера! "Две Бабы-яги"** (Р. Сеф), әкиәт. 10.00, 12.00, 14.00, 16.00 6+

**23, 24 декабрь "Новый год наоборот"** (И. Казакова), әкиәт. 0+

**25, 26, 28 декабрь "Новогодние приключения Длинноуха"** (Л. Исҡужина), әкиәт. 9.00, 11.00, 13.00, 15.00 6+

**27 декабрь "Сказание о семи батырах"** (Д. Йосопов), фэнтези. 10.00, 12.00, 14.00, 16.00 6+

**29 декабрь "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 12.00, 14.00 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**23, 26, 28 декабрь "Приключения белых мышей"** (С. Чураева). 10.00, 13.00, 15.00 0+

**24, 25, 29, 30 декабрь "Приключения белых мышей"** (С. Чураева). 10.00, 13.00, 15.00, 18.00 0+

**25 декабрь "Что такое Новый год?"** (В. Щербакова). 16.00 0+

**26 декабрь "Лесная ярмарка Деда Мороза"** (А. Рахманкулова). 18.00 0+

**27 декабрь "Волшебные приключения игрушек"** (С. Алферова, Н. Нижегородцева). 18.00 0+

**"Приключения белых мышей"** (С. Чураева). 10.00, 12.00 0+

**28 декабрь Премьера! "Ҡар бабай һәм ҡояшҡай"** (А. Малахов). 18.00 0+

**29 декабрь "Снеговик и солнышко"** (А. Малахов). 11.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**23 декабрь "Главный новогодний утренник Уфы",** ғаилә өсөн байрам. 11.00, 13.00, 15.00 0+

**24, 25, 29 декабрь "Главный новогодний утренник Уфы"**, ғаилә өсөн байрам. 11.00, 13.00 0+

**25 декабрь** Рождество с Камерным оркестром. 6+

**26 декабрь Премьера! "Теноровый фейерверк"**. 6+

**27 декабрь "Главный новогодний утренник Уфы"**, ғаилә өсөн байрам. 11.00 0+

**27, 28, 29 декабрь "Baby-Ёлка",** ғаилә байрамы. 12.00 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**23-29 декабрь Премьера! "Муха-цокотуха"** (К. Чуковский), музыкаль әкиәт. 10.00, 12.00, 14.00, 16.00 0+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**23-29 декабрь Премьера! "Переполох в мире елочных игрушек"**, әкиәт. 0+

**23-27декабрь "Бул-буль-буль"ный Новый год или волшебный посох Деда Мороза"** әкиәте менән Красная Башкирия, Байғусҡар, Аҡъяр, Уфимский, Гусев, Подольск ауылдарында гастролдәрҙә. 0+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**29 декабрь "Три богатыря и Соловей-разбойник"** (А. Зарипов инсц.), әкиәт. 12.00 0+

## БР Милли музейы

**24 декабрь "Башҡортостан Республикаһы Конституцияһы көнө"**, акция. 12+

**25 декабрь "Аромат яблок",** М. Кәрим исемендәге фонд директоры Әлфиә Кәримова менән осрашыу. 14.00 6+

**25-31 декабрь "Яңы йыл музей буйлап атлай"**, акция. 0+

**26 декабрь "Ҡышҡы урман тарихтары"**, экскурсия. 15.00 6+

ӘЙҘӘ, ФЕКЕР АЛЫШАЙЫҠ!

# БАЛАЛАР КИТАПТАРЫ НИНДӘЙ?

**Башҡортостанда балалар әҙәбиәтенең йөкмәткеһен контролдә тотасаҡтар. Балалар өсөн китаптар мониторингы буйынса эшсе төркөм булдырыу тураһындағы бойороҡҡа республика Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев ҡул ҡуйҙы.**



Уның билдәләүенсә, быға тиклем дәүләт балалар әҙәбиәте баҫмаһына тейешле иғтибар бирмәгән, Рәсәй Яҙыусылар союзы тикшереүҙәренә ярашлы, балалар китаптарының 60 проценты балаларҙың аңына кире ҡараш тыуҙыра. Үҫеп килгән быуын өсөн әҙәбиәттә көс ҡулланыу, ҡанһыҙлыҡ, дискриминация йәки насар ғәҙәттәрҙе пропагандалау, хәүефле кәнәштәр, ҡурҡыу һәм башҡа кире эмоциялар тыуҙырыу күренештәре тасуирлана, был баланың психик һаулығына кире йоғонто яһай.

"Был проблемаларҙы хәл итеү өсөн төрлө контроль механизмдары бар, шул иҫәптән дәүләт стандарттары, бойондороҡһоҙ экспертиза һәм рейтингтар, шулай уҡ ата-әсәләр контроле, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Константин Толкачев. - Был йәһәттән һәр кемдең балалар әҙәбиәтенең хәүефһеҙлеген һәм сифатын тәьмин итеүҙә ҡатнашыуы мөһим. Мин ата-әсәләрҙе һәм вайымһыҙ булмағандарҙы беҙҙең эшкә ҡушылырға, Дәүләт Йыйылышына үҙ материалдарын һәм тәҡдимдәрен ебәрергә саҡырам. Һәр мөрәжәғәттең адекват реакцияһын һәм иғтибарлы ҡарауын гарантиялайым.Эшсе төркөм составына республика парламенты депутаттары, дәүләт органдары вәкилдәре, шулай уҡ нәшриәтселәр һәм магазин хужалары инде. Улар алдына төбәктә таратылған балалар китаптарының йөкмәткеһен анализлау һәм балаларҙы уларҙың һаулығына һәм үҫешенә зыян килтерерҙә һәләтле мәғлүмәттән һаҡлауға йүнәлтелгән ғәмәлдәге ҡануниәттең һөҙөмтәлелеген баһалау бурысы ҡуйылған.

**Эдуард ҠУСҠАРБӘКОВ.**

# ФОНОГРАММАМЫ, ТЕРЕ ТАУЫШМЫ?

**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышында артистарҙың концертта фонограмма ҡулланыу тәртибе тураһында закон проектын әҙерләйәсәктәр, уны быға тиклем республика парламенты Дәүләт Думаһына индергәйне. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, инициатива тамашасының сығыш форматы тураһында дөрөҫ мәғлүмәт алыу хоҡуғын яҡларға тейеш.**

"Закон проекты концертта фонограмма ҡулланыуҙы яйға һалырға тейеш. Хоҡуҡи механизм анығ булһын өсөн беҙ төп моментҡа - тамашасыға мотлаҡ мәғлүмәт биреүгә иғтибар итәсәкбеҙ. Билет һатып алыр алдынан тамашасы уны тере башҡарыу, әллә йырлау имитацияһы менән "плюслы" фонограмма көтөүенме белергә тейеш. Быны өсөн беҙ ҡануниәткә "плюслы фонограмма" төшөнсәһен индерергә һәм реклама биреүсенең афишаларҙа һәм башҡа реклама продукцияһында тейешле мәғлүмәтте күрһәтеү бурысын билдәләргә тәҡдим итәбеҙ", - тип аңлатты Башҡортостан Ҡоролтайы рәйесе Константин Толкачев.

Әммә бында музыка ҡоралдары һәм башҡарыусы тауышы яҙҙырылған фонограмманы тыйыу тураһында һүҙ бармай. "Тамашасының талабы төрлө. Кемдер артистың үҙен, уның шоуын ҡарарға бара һәм тауыштың "тере" булмауы уны артыҡ борсомай, ә кемдер өсөн тере тауыш мөһим һәм ул "суррогат"өсөн түләргә әҙер түгел. Популяр артистар бар, улар көн һайын тиерлек өсәр концерт бирә. Белгестәр быйай режимда "тере тауыш" менән эшләү мөмкин түгеллеген раҫлаясаҡ. Ә фонограмма тураһында мәғлүмәт булмағанлыҡтан, тамашасы алдана. Беҙҙең закон проекты кешеләрҙең ғәҙел мәғлүмәткә хоҡуғын яҡлай", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Толкачев.

Билдәле булыуынса, закондың яңы редакцияһын ноябрь аҙағында, эксперттар, юристар һәм монополияға ҡаршы хеҙмәт вәкилдәре менән эшләгәндән һуң, тауыш биреүгә сығарырға планлаштыралар.

**Иван ВАВИЛОВ.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КЕШЕНЕ ОҘАҠ КӨТТӨРМӘ...

Аҡыллылар янына барһаң, аңғыраны эйәртмә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Дуҫтар - ваҡытыңдың ҡараҡтары бит ул.

**(Фрэнсис Бэкон).**

Бөйөк кешеләр бәләкәй генәлә лә хатта бөйөк була ала.

**(Маркиз де Вовенарг).**

Баш енәйәттәрҙе лә закон үҙе тыуҙыра.

**(Максимилиан Волошин).**

Кешене асыуландырыу һәм улар күңелендә яуыз уйҙар тыуҙырыуҙың бер ысулы - уны оҙаҡ көтөргә мәжбүр итеү. Был осраҡта көттөрөүсе үҙен ысынлап та әхлаҡһыҙ итеп күрһәтә.

**(Фридрих Ницше).**

Ҡулыңда яра булмаһа, ағыуҙы ҡулда илтергә мөмкин. Ағыу яраһыҙ ҡулға зыян итә алмай. Шуның кеүек, үҙе яуызлыҡ ҡылмаған кешегә лә яуызлыҡ йоҡмай.

**(Будда).**

Китаптан уҡып ҡына белемгә эйә булыу - ул нигеҙ түгел, ә биҙәүес кенә.

**(Мишель де Монтень).**

Ярһыу теләк - дарылы мискә, ә үҙ-үҙеңде яратыу - оскон.

**(Фаддей Булгарин).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Борон заманда бер батша оло һарай һалдырған. Унда миллион көҙгө эленеп торған. Бөтә диуарҙары, иҙәне, түбәһе - барыһы ла тик көҙгөнән булған. Бер саҡ һарайға бер эт йүгереп барып ингән. Әйләнә-тирәһендә үҙе һымаҡ уҡ әллә күпме эттәрҙе күреп, ҡаушап ҡалған. Тәүҙә эт үҙен яклау һәм башҡа эттәрҙе ҡурҡытыу өсөн, тештәрен ыржайтып, ырылдап ҡына торған. Уға яуап итеп башҡа эттәр ҙә ырылдаған. Эт өрөп ҡуйған икән, башҡалар ҙа өргән. Хәҙер инде эт үҙенең ғүмере ҡурҡыныс аҫтында булыуын ныҡлап тойған һәм ярһып өрөргә тотонған. Уның менән бергә башҡа эттәр ҙә ярһыған...**

**Иртән был этте үле килеш тапҡандар. Һарайҙа ул берҙән-бер эт булған, ә көҙгөләрҙә миллион үле эт һындары сағылған. Шулай итеп, был эт үҙ күләгәһе, үҙенең көҙгөләге сағылышы менән көрәшеп, һәләк булған...**

**...Әгәр ҙә үҙебеҙҙең күңелебеҙҙә ҡаршылыҡ юҡ икән, ул ҡаршылыҡ тормошта ла юҡ. Әгәр ҙә һин үҙ-үҙеңә ҡамасауламайһың икән, тимәк, тормошта ла һиңә ҡамасаулаусы бер ни ҙә юҡ. Тормош ҡануны шундай. Донъя - оло бер көҙгө, донъя - көҙгөләге бер сағылыш ҡына...".**

УЙЛЫҒА - УЙ

## Китмәһендәр!

Яҡташтарым! Ситкә ебәрмәгеҙ,
Аҡыллынан тыуған баланы!
Алйото ла кәрәк үҙебеҙгә,-
Шунһыҙ донъя ҡыҙыҡ буламы?

Ебәрмәгеҙ ситкә матурҙарҙы -
Бала тапмаһындар сит-яттан.
Балалары үҙ телдәрен белмәй -
Нисек үлмәй икән ояттан?

Егәрләләр кәрәк үҙебеҙгә,-
Ҡырылмаһа-ҡырҡ эш ята .
Ғибрәт алыу өсөн ялҡауы ла,
Яуызы ла кәрәк бит хатта!

**Буранбай ИСҠУЖИН.**

## Яҡтылыҡ эҙләп китәйем...

Юл сатында юл һораштым,
Һуҡыр башҡорт ҡартынан.
Ҡурай тарта ине ул ҡарт -
Ҡурайсылар затынан .
"Яҡтылыҡҡа юл эҙләһәң,
Улым, күктә ҡояш, - ти,-
Үҙеңә кәрәк һуҡмаҡты
Шул ҡояштан һораш", - ти.

Ҡояш минә яуап бирҙе,
"Ерҙә үҫә ҡурай, - ти,-
Уның моңо күңелдәрҙе
Яҡтылыҡҡа сорнай", - ти .
Бына туғай. Күпме ҡурай!
Киҫеп ал да тарт, әйҙә!
Ҡурай уйнай белмәйем шул,
Юл күрһәткән ҡарт ҡайҙа?
Ҡайҙа теге аҡһаҡал ҡарт,
Ҡурайсылар затынан?
...Яҡтылыҡ эҙләп китәйем,
Ошо ҡарттың артынан...

**Рамай ҠАҺИР.**

## Батырҙар юлы

Ғәййәр булған ата-баба -
Хатта һыймаслыҡ башҡа:
Танк-самолет заманында
Атта киткән һуғышҡа.

Ҡанлы яуҙар мәхшәрендә
Фрицтың бирепе кәрәген,
Күрһәткән атлы башҡорттар
Ҡаһарманлыҡ үрнәген.

Етмеш һигеҙ алтын йондоҙ...
Ундай ғәскәр бүтән юҡ.
Танкыларҙы үтә тишер
Беҙҙекеләр атҡан уҡ.



Ядро һуғышы башланһа,
Йә тағы берәй нәмә -
Башҡорт Ватанын һаҡларға
Атҡа ултырмаҫ тимә.

Әгәр бер саҡ машиналар,
Терминаторҙар ҡалҡһа,
Сит планета роботтары
Килеп баҫҡа йыраҡтан,

Зомби, убыр, әүерməндән
Ғазап кисерһә ил-йорт,
Хәшәрәтте ҡылыс менән
Тураҡлар атлы башҡорт.

**Морат СОЛТАН.**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 24050

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
19 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 2246